✓ ***Өфөләләр иғтибарына: йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында "Киске Өфө"гә 6 айға 330 һумға яҙыла алаһығыҙ - почта йәшнигенә юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ. Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 246 һум.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28 СЕНТЯБРЬ
4 ОКТЯБРЬ
(ҺАРЫСАЙ - ҠАРАСАЙ)
2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№39 (561)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Хаж сәфәрегеҙ...**
хәүефһеҙ булһын, тиһәгеҙ



5

**Оло йәштәгеләргә...**
байрам да, иғтибар ҙа кәрәк



6

**Шәжәрәләр...**
милләтте һаҡлауҙың бер ысулы



7

**Хәрби халыҡтың ғына...**



8-9 данлы тарихы була

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәйҙә ике бәлә бар: тиләләр һәм юлдар. Шуға хәҙер өсөнсөһө өҫтәлде: кредиттар. Ошо мәсьәләгә мөнәсәбәтегеҙ нисек? Ярҙам итәме кредиттар халыҡҡа, әллә ярҙан этәме?



***Вилур РӘХИМҒОЛОВ, "Баймаҡ" халыҡ промыслаһы үҙәге етәксеһе, эшҡыуар:*** Кредит күп кешене бурысҡа батыра, бурысын түләй алмай, хатта фатирһыҙ, башҡа төр милекһеҙ тороп ҡалыусылар ҙа бар. Шуға күрә, кредит алырҙан алда һәр кем үҙ хәлен самалап ҡарарға, уйларға тейеш: түләй аласаҡмы ул киләсәктә был сумманы, әллә юҡмы? Күптәр реклама шауҡымына бирелеп, аҙағын уйлап тормай, тиҙерәк аҡса алырға йүгерә. Буш хыял менән осонорға түгел, ә ерҙән атлап йөрөргә, һалҡын ҡанлылыҡ һаҡларға кәрәк. Ҡайһы саҡ кешене кредит осоро бөткәнсе бөтәһе күпме түләргә тейешле түңәрәк кенә һандарға күҙ һалып алыу ҙа айнытып ебәрә. Иң мөһиме, аҡсаның аныҡ тәғәйенләнешен күҙ алдына килтереп, уны ниндәй маҡсатта тотоноуыңды, уның ниндәй файҙа килтерәсәген ныҡлы уйлап, планлаштырғандан һуң ғына бурысҡа аҡса алырға булалыр, тигән уйҙамын. Әгәр ҙә инде шөғөлләнгән берәй эшең булып, кредит сығымдарын ҡапларҙай мөмкинлегең бар икән, ул саҡта ҡурҡмайынса бурысҡа инә алаһың әле, сөнки һуңғы һөҙөмтәнең икеләтә файҙа бирәсәгенә иҫәп тотаһың. Ә бит бәғзе берәү ахырғы һөҙөмтәне уйлап тормаҫтан, муйынын элмәккә тыға. Тормошта әллә ни кәрәге булмаған, мәҫәлән, яңы иномарка, ниндәйҙер супер автомат берәй көнкүреш машинаһы һатып алыу хыялы менән янаһың икән, тотороҡло хеҙмәт хаҡы алып эшләгән эш урының булыуы мотлаҡ. Үҙемә килгәндә, мин кредит алырға бик тырышып тормайым. Эшенде яйға һалып алһаң, кредиттың әллә ни кәрәге юҡ, тигән фекерҙәмен.

***Гүзәл ХАРРАСОВА, адвокат:*** Аҡса бик кәрәк булып киткән саҡтарҙа кредит ярҙам итеп ебәрә инде, әлбиттә, тик ул осраҡта ла түләр самаңды, килемеңде, йәшәү кимәлеңде иҫтә тотоп, бурысҡа инергә кәрәк. Кредит менән проблема килеп тыумаһын өсөн икенсе шарт - килешеүҙе ҡабаланмай, иғтибар менән уҡып сығырға кәңәш итер инем. Үҙҙәренә файҙа өсөн банктар теләһә ниндәй хәйләгә, алдашыуға ла барыуы ихтимал. Мәҫәлән, килешеүҙә үҙҙәре өсөн отошло шарттарҙы ваҡ ҡына хәрефтәр менән яҙып ҡуйыусан банктар. Был бигерәк тә һуңғы йылдарҙа сәскә атыусы ваҡ, коммерция банкыларына ҡағыла. Килешеү шарттары аңлашылып бөтмәгән осраҡта уға ҡул ҡуйыуҙан тыйылып, килешеү проектын йәки күсермәһен һорап алып, адвокаттар менән кәңәшләшеп алыу ҙа зыян итмәҫ ине. Әйткәндәй, яңыраҡ ҡына беҙҙән ярҙам һорап бер ханым мөрәжәғәт итте: кредитҡа ҡиммәтле автомашина, һыуытҡыс һатып алған. Ире менән айырылышҡас, бер үҙенең эш хаҡынан кредит түләүе бермәбер ауырлашҡан, бурысы йыйылып киткән. Һөҙөмтәлә банк хеҙмәткәрҙәре уның фатирын тартып алыу менән янай башлаған. Шуны әйтмәксемен: әгәр бурыслы кешенең башҡаса йәшәр урыны юҡ икән, банк уға ҡарата бындай санкция ҡуллана алмай. Ә инде ике фатиры булһа, береһенән ҡолаҡ ҡағыуы мөмкин, йә иһә фатиры залог итеп алынған ипотека кредитын түләй алмаған хәлдә бурыслының урамда тороп ҡалыуы ла ихтимал. Бурыслы булып ҡалған осраҡта дача, гараж, машина кеүек милектән дә яҙыу ихтималлығы бар икәнен онотторға ярамай.

(Дауамы 2-се биттә).

ШАҒИР ҺҮҘЕ




## ЕР ТУРАҺЫНДА ЕТЕ ҺҮҘ

***Эй ырыуҙашым, һатма ереңде!***
***Һатһаң ереңде - алыпһатарҙар***
***тунар тиреңде!***

***Эй яҡташ, белеш, һатма ереңде!***
***Һатһаң ереңде - яҡтың тигән һүҙ***
***яҡты көнөңдө!***

***Эй илдәшкәйем, һатма ереңде!***
***Һатһаң ереңде - ҡара көс беҙҙе***
***ныҡты тигән һүҙ!..***

***Эй ҡан-ҡәрҙәшем, һатма ереңде!***
***Һатһаң ереңде - ата-бабаңды***
***һаттың тигән һүҙ!***

***Эй рухташым, һатма ереңде!***
***Һатһаң ереңде - мәңге ҡоллоҡҡа***
***баттың тигән һүҙ!..***

***Эй туғанҡайым, һатма ереңде!***
***Һатһаң ереңде - бар тоҡомоңдо***
***быуҙың тигән һүҙ!***

***Эй милләттәшем, һатма ереңде!***
***Һатһаң ереңде - ғәзиз халҡыңды***
***һаттың тигән һүҙ!***

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

Гәзитебеҙҙең 38-се һанындағы "Шағир һүҙе" рубрикаһында билдәһеҙ авторҙың "Тере тамсы" тигән шиғырын баҫтырғайныҡ. Уның авторы табылды: Әбйәлил районында йәшәгән танылған шағирыбыҙ Әсхәл Әхмәтхужа ағайҙың шиғыры икән ул. Шиғырҙы беҙҙең гәзиттең электрон почтаһына ебәргән кеше, күрәһең, уның авторын үҙе лә белмәгәндер. Хәйер, "Тере тамсы" кеүек шиғырҙың халыҡ араһына таралып, халыҡ һүҙе булып китеүе үҙе бер мәртәбә түгелме ни автор өсөн?..

✔ Кредиттар былай ҙа ярлы халыҡты талау ысулына әйләнде, тип уйлайым мин. Шуға күрә гәзит уҡыусыларҙы яңылыш аҙым яһауҙан һаҡ булырға саҡырам: бурысҡа батып йәшәгәнсе, ярлы йәшә. Ас тамағың- тыныс күңелең.



ИШАРА

# ВӘҒӘҘӘЛӘРГӘ...

## алдана ла ҡуя кеше

**Сентябрь башындағы берҙәм һайлауҙар көнөндә әхирәтемә шылтыратып, "Кемгә тауыш бирҙең ?" тип һорағайным. Ә ул: "Ҡасан буласаҡ ул һайлауҙар?"- тип, һорауыма ҡаршы һорау менән яуап бирҙе. Мин: "Һайлауҙар 8 сентябрҙә булып үтте инде", - тигәс, рәхәтләнеп көлөштөк. Кешеләрҙең көҙгө мәшәҡәттәр, баҡсаларында уңышын-маҙарын йыйыу менән булған мәле бит, минең әхирәтем кеүек, был оло сәйәси сараны онотоусылар күп булғандыр халыҡ араһында, тим.**

Күптән түгел матур бер кино ҡарағайным. Скрипка буйынса уҡытыусы-профессор Себостиян Иванович Бахов коммуналкалағы фатирының кухняһына сәй ҡайнатырға инһә, оло йәштәге инәйҙәр унан: "Себостиян Иванович, һеҙ кем өсөн тауыш бирәһегеҙ? Тиҙҙән һайлауҙар етә бит", - тип һорайҙар. Бөтә булмышы тик моңға тулы уҡытыусы уянып киткәндәй була һәм: "Ә кандидаттарҙың кемеһе скрипкала уйнай белә?" - тип ҡыҙыҡһына...

Шуның һымаҡ, әлеге һайлауҙар мәлендә лә: "Был кандидаттарҙың кемеһе башҡортса һөйләшә лә, кемеһе минең телемдә яҡлар икән?" - тип ҡыҙыҡһындым. Кандидаттарҙың фатирыма алып килеп тапшырылған программаларын уҡыштырып ҡарағайным да ул. Бөтәһе лә "алтын тауҙар" вәғәҙә итә. Әммә ул "алтын тауҙар" янында бер ҙә генә лә күңелде тынысландырыр нәмәләр тапманым. Өҫтөбөҙгә ябырылып килгән глобаллаштереүҙән, баҙар иҡтисадынан, оптималләштереүҙән кем һаҡлар, шулар һөжүменән һуң юҡҡа сығыу ҡурҡынысына тарыған рухи байлыҡтарыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ, телебеҙ өсөн кем көрәшер? Ошо һорауҙарымды төбәргә теләгәйнем дә үҙем һайлаясаҡ кандидаттарға, улар мине тынлай, мине аңлай торған кешеләр түгел ине шул...

Эйе, "Алтын тауҙар" кәрәкмәй беҙгә, үҙебеҙҙең изге тауҙарыбыҙ һаҡланһа, урмандарыбыҙҙы аяуһыҙ ҡырыуҙан туҡталалар, шул еткән. Ата-бабаларыбыҙ бит "алтын тауҙар" өсөн түгел, ана шул үҙебеҙҙең Уралыбыҙ, Торатауыбыҙ, урмандарыбыҙ өсөн ҡан түккән...

Ошонда Рәми Ғариповтың "Урал урманы" шиғыры иҫкә төшә:

*Шаула-шаула Урал урманҡайы,*
*Сығам һинән нурға төрөнөп,*
*Үҙ-үҙемә мәхлүк бер көйөк тә,*
*Хатта бер бөйөк тә күренеп.*

Мин дә үҙемде башҡорт милләте вәкиле булыуым менән бәхетле кешемен тип ҡабул итәм. Данлы тарихыбыҙ, моңобоҙ, тылсымлы ҡурайыбыҙ ғына ни тора! Ниндәй байлыҡ! Тик ошо байлыҡтарға лайыҡ булып йәшәргә кәрәк. "Алтын тауҙар"ға алданмайынса, тием.

**Айгөл АХУНОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Рәсәйҙә ике бәлә бар: тилеләр һәм юлдар. Шуға хәҙер өсөнсөһө өҫтәлде: кредиттар. Ошо мәсьәләгә мөнәсәбәтегеҙ нисек? Ярҙам итәме кредит халыҡҡа, әллә ярҙан этәме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Фәрит ЙӘНБИРҘИН, хеҙмәт ветераны:*** Кредит алыуы бик еңелләште бөгөн. Эшләйме кеше, бот күтәреп өйҙә ятамы, бурысын түләр хәлдәме, юҡмы - банктарҙы был ҡыҙыҡһындырмай. Паспортың булһа - шул еткән. Урланған паспорттарҙы файҙаланыусылар ҙа байтаҡ булды. Ә элек нисегерәк ине, иҫкә төшөрәйек әле: эш хаҡы , ғаилә хәле һ.б. тураһында белешмәләр, ике-өс ышаныслы кешең булмайынса, кредит бирелмәй ине. Унда ла әле кредит алыусыны энәһенән-ебенә тиклем тикшереп, банк советы кәңәшләшкәндән һуң ғына ҡарар сығара ине. Еңел аҡса бер ҡасан да файҙа килтермәй шул. Ә беҙҙә халыҡ батып барғанда һаламға йәбешкәндәй, кредитҡа ташланды - уға бөгөн аҡса булһын, ә иртәгәһен ишәк ҡайғыртһын, тигәндәй... Аҙаҡ, түләй башлағас, теләһә тешләрҙәй була ла ул. Рәсми мәғлүмәттәргә ҡарағанда, һуңғы ике йылда рәсәйлеләрҙең банктарға түләнмәгән кредит бурысы 9 триллион(!) һумға барып еткән. Эшкә һәләтле халыҡтың 45 проценты кредит менән файҙалана. Хабаровский крайында һәм ҡайһы бер көнсығыш төбәктәрҙә халыҡ, ғөмүмән, 100 проценты менән бурысҡа йәшәй, тип хәбәр итә рәсми сығанаҡтар. Илебеҙ халҡы ҡолағына хәтлем кредит һаҙлығына батҡан. Ямғырҙан һуң бәшмәк кеүек күбәйгән һәр төрлө коммерция банктары ни теләй - шуны эшләй. Халыҡҡа кредит таратыу өсөн күбеһенең хатта Үҙәк Банк лицензияһы ла юҡ, шуға күрә лә уларҙың эшмәкәрлеген күҙәтеүсе, контролдә тотоусы ла юҡ. Бурысҡа батҡан клиенттарын "ҡоҫтороу" өсөн улар ни генә ҡыланмай. Яңыраҡ бер гәзиттә уҡыным: бурысы булған бер ир банк советынан "Түләй алмаһаң - атылып үл!" тигән открытка алып, үҙенә күрәләтә һәләкәт менән янаусы банкирҙар өҫтөнән полицияға ялыу яҙған. Юристар әйтеүенсә, бурыс түләтеүҙең бындай кешелекһеҙ алымдары закон боҙоу булып иҫәпләнә. Кредиттар былай ҙа ярлы халыҡты талау ысулына әйләнде, тип уйлайым мин. Шуға күрә гәзит уҡыусыларҙы яңылыш аҙым яһауҙан һаҡ булырға саҡырам: бурысҡа батып йәшәгәнсе, ярлы йәшә. Ас тамағың- тыныс күңелең. Бигерәк тә кредитҡа машина биреүҙе сикләргә кәрәк, тип уйлаймын, сөнки хәҙер ҡала урамдарында алма төшөр урын да ҡалманы бит! Ә күпме авария булып тора көндә...Кредит бирәләр икән, бирһендәр ана йортһоҙҙарға ташламалы ипотека кредиты - бына был, исмаһам, файҙалы эш булыр ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 384 һум 36 тингә, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) 414 һум 36 тингә яҙылырға була.**



Ғафури районының башҡорт теле уҡытыусылары.

Сентябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостанға Монголияның рәсми делегацияһы килде, уларҙың төп маҡсаты - республика умартасылары менән тәжрибә уртаҡлашыу. "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге"нән хәбәр итеүҙәренсә, делегация составында 10 кеше. Ғилми-тикшеренеү үҙәгенең "Шаамарын Тохой" кооперативы менән хеҙмәттәшлеге 2008 йылда Монголияға башҡорт токомо бал ҡорттары күстәрен оҙатыуҙан башланғайны. Башҡорт бал ҡорто Монголия далаһында ла үҙен егәрле эшсән итеп күрһәтте. 2009 йылда Монголияға Башҡортостандан бал ҡорттары күстәрен һәм умартасылыҡ инвентарҙарын оҙатыуға биш йыллыҡ контракт төҙөлдө.

✔23 сентябрҙән Өфөнөң балалар баҡсалары, мәктәптәр, юғары уҡыу йорттары, дауалау-профилактика учреждениелары, торлаҡ йорттар һәм башҡа социаль-көнкүреш объекттарының үҙәктән йылылыҡ менән тәьмин ителгән системаларына йылы бирелә башланы. Өфөнән тыш, Благовещен һәм Ағиҙел ҡалаларында ла йылытыу миҙгеле башланыуы тураһында ҡарар ҡабул ителде. Ошо көндәрҙә республиканың башҡа ҡалаларында ла йылы бирелә башлаясаҡ.

✔Күп балалы ғаиләләргә ярҙам программаһы ғәмәлгә ингәндән алып Башҡортостан әсәлек капиталын түләү иҫәбе буйынса өсөнсө урынды билә. Башҡортостанға дүрт йылда 29 миллиард һум аҡса күсерелгән. Был - былтыр халыҡ һаны кәмеүе күҙәтелгән ун иң күп аҡса алыусылар иҫәбенә ингән өс төбәктең береһе (ҡалған икеһе - Кемерово өлкәһе һәм Алтай крайы). Ә әсәлек капиталын түләүҙәр һаны буйынса беренсе урынды Чечен Республикаһы (32 млрд һум саmaһы) биләй, икенсе урында - Татарстан (29,5 млрд һум). Дөйөм алғанда, илдә әсәлек капиталын 4 миллион 600 мең ғаилә алған. Быйыл уның күләме 408 960,5 һум тәшкил итә.

✔225 йыл элек Екатерина II ҡарары менән Ырымбур Мосолмандар диниә йыйылышы ойошторола, хәҙерге Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назараты унын вариҫы. Беренсе мөфтөй итеп Мөхәмәтйән Хөсәйенов тәғәйенләнә. Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назаратының 225 йыллығына арналған тантаналы саралар Өфөлә октябрҙә үҙғарыласаҡ.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ЙӨРӘГЕ ҺЫҘЛАМАҒАНДЫҢ...

## башы ауырта

**Гәзиттең 32-се һанында "Ҡайһы ереӊ ауыртһа, йәнеӊ шул ерҙә" тигән әйтемгә ҡарата фекерҙәрем баҫылғас, күренекле шағирәбеҙ Тамара апай Ғәниева шылтыратып, түбәндәге һүҙҙәрен әйтте: "Мырҙам, ауыртыу хаҡындағы мәҡәләңде уҡыным. Әлбиттә, был хаҡта философик фекер йөрөтөүең һәйбәт, тик бына ысын физик ауыртыуҙы тойған саҡта барлыҡ философия юҡҡа сыға. Кеше был хәленән ҡотолоу юлын үлемдә генә күрә башлай. Һуңғы ваҡытта бик ҡаты ауыртыу тойғолары кисереп, "үсемлек" кә әйләнгәндән һуң мин шундай фекергә килдем..."**
**"Ауыртыу" тигән шиғыр ҙа яҙған Тамара апай Ғәниева. Шиғыры шундай юлдар менән тамамлана:**
**Күңел кителеүҙәр үтә бит ул,-**
**Ваҡытлыса йәнеӊ сабыртыу...**
**...Аңды томаларлыҡ көс бар ерҙә**
**Ғәли Йәнәптәре - Ауыртыу.**
**"Йөрәге һыҙламағандың башы ауырта" тигән тағы бер әйтем дә бар халҡыбыҙҙа. Уның хаҡында ишеткәнем юҡ ине, "Башҡорт халыҡ ижады"ның мәҡәлдәргә һәм әйтемдәргә арналған X томлығында юлыҡтым уға. Хәҙер инде уның мәғәнәһен аңларға тырышып ҡарайыҡ.**



Фәкир генә ике ағалы-ҡустылы туғандар йәшәгән. Улар ҡайғыны ла, шатлыҡты ла уртаҡлашып, бер-береһенә ярҙамға килеп, бер йән булып ғүмер һөргән. Бер көндө туғандарҙың береһе кәтмәгәндә алтын һарай һатып алырлыҡ аҡса табып алған. "Әгәр ҙә был байлыҡты мин үҙем генә тапҡанмын икән, нишләп мин уны башҡа кеше менән бүлешергә тейеш һуң әле?" тип уйлап ҡуйған ул шундуҡ. Шулай итеп, ул үҙенең туғанынан алыҫлаша башлаған, уның менән элеккесә яҡын аралашыуҙан ҡасҡан. Тәүге осорҙа ул аҡсаһына тәмтомдар һатып алып, туғанынан ҡасып, йәшеренеп ашап йөрөгән. Бер мәл туғаны уның йортона килеп ингәндә, кинәт байып китеүсе байрам табыны ойошторған булған.

-Әгәр ҙә һинең өстәлең бындай ниғмәт-һыйҙан һығылып тора, янындағылар һинең өсөн өҙөлөп тора икән, тимәк, һинең күңелеңдә лә оло байрам тойғоһо бар, туғаным. Мин һинең өсөн шатмын, шул байрамың менән ҡотларға тип килдем, - тигән өстәл артында тәм-том менән тығынып ултырыусы туғанына өйгә килеп инеүсе.

Әммә йорт хужаһы туғанына күтәрелеп тә ҡарамаған. Улай ғына ла түгел, уның әйткәндәрен ишетмәмешкә һалышҡан. Уның ҡыланышын бер нисек тә ҡабул итә алмаған туғаны баҫҡан урынында тапанып торған-торған да, һуңғы сиктә, ни эшләргә белмәйенсә, өйҙән сығып киткән. Ул ҡабат кинәт байып киткән туғанының йортона ике аяғының береһен дә баҫмаған. Әммә туғанының үҙенә ҡарата битарафлығын, байлыҡҡа тарығандан һуң кешелеклек сифаттарын юғалтыуын күреп ҡайғырыуҙан уның йөрәге ауырта башлаған. Тора-бара был ауырыуы хроник рәүеше алған. Әммә башҡалар өсөн ҡайғырып, уларҙың һыҙланыуын үҙ йөрәгенә алып йәшәгәнгә күрә, кеше күңелле булыуы сауабы менән ул донъяла оҙайлы ғүмер һөргән.

Ә уның күтәргеһеҙ күп байлыҡҡа эйә булыусы туғаны ярлы булып ҡалған ҡандашының үҙенең йортона килмәй башлауына ҡыуанған ғына. Ул нимә теләһә, шуны ашап, шуны эсеп, йортона йәне теләгән әйберҙе һатып алып, үҙенсә бәхетле ғүмер кисергән. Бер аҙҙан уның йорто, өй эсе затлы йыһаз менән тулған. Яһалма байлыҡ артынан ҡыуа торғас, ул ниндәйҙер ысын байлығын юғалта барыуын тойған, тик был хаҡта етди уйланырға уның ваҡыты ҡалмаған. Кешелеклелектең дә, изгелектең дә, ихласлыҡтың да нимә икәнен онотҡан, байлыҡты бәхеткә тиңләгән. Һәр ваҡыт уның мейеһендә бер генә уй йәшәгән: "Бар байлыҡ минеке, уны башҡа берәү менән бүлешергә башым ике түгел минең..."

Шулай уйланып йөрөй торғас, бер мәл уның башы ауырта башлаған. Тора-бара башы ауыртыуы түҙеп торғоһоҙға әүерелеп, шулай уҡ хроник рәүеш алған. Ятһа ла, торһа ла башы зәңкеп ауыртыуын онота алмаған был байҙың күңелен бәхетлелелек хисе бөтөнләйгә ташлап киткән. Табиптарҙың кеменә һәм ниндәйенә генә мөрәжәғәт итмәгән ул, әммә уларҙың береһе лә уны баш ауыртыуынан ҡотолдора алмаған. Ахыр сиктә, ул бик зирәк бер күрәҙәсегә мөрәжәғәт иткән.

-Әгәр ҙә кешенең йөрәген май бөрһә, ул баш мейеһенә ҡанды ҡыуып еткерә алмай. Һинең баш мейең тап шул сәбәптән ауырта ла инде, - тигән уға аҡһаҡал.

-Ә минә был яфаларҙан нисек ҡотолорға һуң, улай булғас? - тип иламһыраған бай.

-Берҙән-бер юл - ябығыу, - тип яуаплаған уға күрәҙәсе. - Әммә ябығыу һимереүгә ҡарағанда күпкә ауырыраҡ. Һимереү өсөн бер ниндәй ҙә көс түгеү кәрәкмәй, ә бына ябығыу өсөн иҫ киткес ҙур ихтыяр көсө кәрәгәсәк. Ә бына һинең кеүектәрҙә ихтыяр көсө бөтөнләй булмай. Шуға күрә һинең кеүектәр ҡартлыҡтан түгел, ә йәп-йәш сағында һимеҙлектән һәм баш ауыртыуынан донъя менән хушлаша. Ә йәш саҡта баш ахмаҡлыҡ арҡаһында ауырта...

Шулай итеп, был бай тәкәтһеҙ башы һыҙлауына түҙә алмайынса, йәш көйөнә йән биргән. Ә бит барыһы ла кешенең баш ауыртыуҙан түгел, йөрәк ауыртыуҙан үлгәнен яҡшы белә. Шулай булғас, башың ауыртҡансы йөрәгең ауыртһын ул. Йөрәк хистән, кеше өсөн ҡайғыра белеүҙән, ә баш түбән уйҙарҙан, бәғерһеҙлектән ауырта...

Был риүәйәттә "Башы һыҙламағандың йөрәге ауырта" тигән әйтемгә ике төрлө аңлатма ла бар. Тәүгеһе - күрәҙәсе әйткәнсә, май бөргән йөрәктең баш мейеһенә ҡанды еткерерлек хәләттә булмауы, йәғни биофизиологик аңлатма, икенсеһе - битарафлыҡтың, хушкүңеллелектең, күңел күҙе һуҡырлыһының һуңғы сиратта ошо сифаттарға эйә булыусыны һәләкәткә алып килеүе, йәғни философик аңлатма.

Тап шулай. Донъя яратылғандан алып тап шундай ҡағиҙәгә ҡоролған да инде. Әгәр ҙә беҙ бөгөн үҙебеҙҙең тормошта һәм оло донъяла күҙәтелгән бәләкәй генә бер хәлгә: ғәҙелһеҙлеккә, бәхетһеҙлеккә, бәғерһеҙлеккә, кәмһетелеүгә, әйберһетеүгә күҙ йомоп ҡарайбыҙ, үҙебеҙҙең битарафлыҡ мөнәсәбәтебеҙҙе күрһәтәбеҙ икән, был хәләтебеҙ үҙебеҙҙе ваҡытыһынан алда һәләкәткә алып киләсәк. Сөнки үҙебеҙ ҙә шундай уҡ мөнәсәбәткә, хәл-ваҡиғаға тарыған саҡта башҡалар ҙа беҙгә ҡарата шундай уҡ битарафлыҡ мөнәсәбәтен күрһәтәсәк.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә киләсәктә 1812 йылғы Ватан һуғышында Наполеон армияһына ҡаршы көрәшкән башҡорт яугирҙарына арналған һәйкәл асылыуы ихтимал. Бындай һәйкәл ҡуйыу башланғысы менән "Тоньяҡ амурҙары" тарихи клубы ағзалары Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовҡа мөрәжәғәт иткән. Проект авторы һүҙҙәренсә, буласаҡ һәйкәлдең проекты әҙер. Уны ул триумф арҡаһы итеп күҙаллай. Проект авторы һүҙҙәренсә, ҡыйыу яугирҙарҙы сағылдырыу өсөн был форма донъяның күп илдәрендә ҡулланыла.

✓3-6 октябрҙә Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте республиканың көньяҡ-көнсығыш районларында китап продукцияһы күргәзмә-йәрминкәһе ойоштора. Баймаҡ, Бөрйән районлары халҡына нәшриәттә баҫылып сыҡҡан яңы китаптар, мосолман, йыртма, мәктәп календарҙары, уҡытыу-методика әсбаптары тәҡдим ителәсәк. Китап сауҙаһы 3 октябрҙә иртәнге 10-дан 6-ға тиклем "Иҫке Собханғол баҙары"нда, 4 октябрҙә район мәҙәниәт һарайы фойеһында, 5 октябрҙә "Баймаҡ" сауҙа-сервис комплексында, 6 октябрҙә Баймаҡ ҡалаһының үҙәк баҙарында ойошторола.

✓Ял көндәрендә, 28 һәм 29 сентябрҙә, Өфөлә сираттағы көҙгө йәрминкәләр үткәрелә, унда арзаныраҡ хаҡҡа төрлө ауыл хужалығы продукттары һатып алырға мөмкин буласаҡ. Сауҙа ойоштороу урындары ҡала халҡына билдәле, тик был юлы Йәштәр һарайы һәм Спорт һарайы алдындағы майҙандарҙа ауыл хужалығы продукттары менән һатыу итеү ойошторолмаясаҡ. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан баш ҡалаһында көҙгө ауыл хужалығы йәрминкәләре 27 октябргә тиклем дауам итәсәк.

✓Таңсулпан Бураҡаеваның "Өйләнәм!" фильмы Мәскәүҙә уҙасаҡ VI Бөтә Рәсәй "Арткино" авторлыҡ ҡыҫҡа метражлы фильмдар фестивалендә ҡатнашасаҡ. Быйыл конкурс программаһына 80-дән ашыу төрлө жанрлы таҫмалар ҡуйылған: уйын, документаль, анимациялы, шулай уҡ экспериментал кино. "Өйләнәм!" фильмы 15 минутҡа тиклемге "Уйын киноһы" номинацияһында тәҡдим ителгән.

**"Башинформ"дан.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БЕР МАНДАТТЫ...
## икенсеһенә алмаштырҙылар

**Өфө ҡала округы Советының сираттағы ултырышы гәҙәттәгенән саҡ ҡына башҡасараҡ үтте. Сөнки бер юлы өс депутатҡа креслоһын ҡалдырырға тура килде. Башыңа әллә ниндәй уйҙар кермәһен, хөрмәтле уҡыусым, бары тик Ирек Ниғмәтуллин, Тимур Хәкимов һәм Илдус Ғүмәров 8 сентябрҙә үткән БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һайлауҙарҙа еңеп, республика парламенты депутаты мандатына эйә булдылар. Шуға күрә ҡала округы Советында уларҙың вәкәләттәре ваҡытынан алда туҡтатылды.**

Мәғлүм булыуынса, ошо өс кеше араһында бигерәк тә Ирек Ғәзиз улының ҡала өсөн эшләгән хеҙмәте ҙур. Ул бер нисә саҡырылыш рәттән ҡала Советы депутаты итеп һайланып ҡына ҡалманы, ә корпусты етәкләне, ҡала проблемаларын энәһенән-ебенәсә белеп, күреп, уларҙы хәл итеүҙә ҙә өлөшөн индерҙе. Был хаҡта ҡала Советы рәйесе Евгений Семивеличенко ла, ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов та билдерҙе. "Әлбиттә, мәсьәләне күҙ ҡарашынан аңлап, һорауҙы ярты һүҙҙән аңлап, уны шунда уҡ хәл итергә тотонған кеше менән айырылышыуы ауыр. Әммә Ирек Ғәзиз улы ла, башҡа депутаттар ҙа беҙҙе ташламаҫ, беҙ республика парламентына инициатива менән сыҡҡан закон проекттарын үткәреүҙә ярҙам итер, тип ышанабыҙ", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

Әйткәндәй, ҡала Советы депутаттары әле үк Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға "Башҡортостан Республикаһының социаль-иҡтисади үҫешен дәүләт фаразлауы тураһында" республика законына үҙгәрештәр индереү буйынса инициатива менән сығырға планлаштыра һәм был идея бер тауыштан хупланды. Тәҡдим ителгән үҙгәрештәрҙең асылы эре һәм урта предприятиелар етәкселәренең муниципалитеттарға үҫеш тураһындағы фаразларын тапшырыу бурысын юридик яҡтан нығытыуға ҡағыла. Йәғни район, ҡала, тотош республиканың социаль-иҡтисади үҫешен күҙаллау өсөн етәкселәрҙең мотлаҡ үҙҙәре етәкләгән тармаҡтың үҫеш фаразларын тапшырыуы кәрәк. Әлеге ваҡытта ҡануниәттә бындай бурыс яҙылмаған, шулай ҙа муниципалитеттар кәрәкле мәғлүмәтте һорап ала ала.

Шулай уҡ ултырышта сираттағы тапҡыр 2013 йылға ҡала бюджеты һәм пландағы 2014, 2015 йылдар осоро бюджетына ла үҙгәрештәр индереү мәсьәләһе ҡаралды. Сөнки, мәғлүм булыуынса, был төп документтар өс йылға ҡабул ителде, ә тормош бер урында тормай. Сентябрҙә ҡаралып йә кәмеп китеүе мөмкин. Бөгөнгө үҙгәрештәр иһә ҡала бюджетына юғары кимәлдәге бюджеттарҙан субвенсиялар биреләүенә бәйле. Шуға бынйылға ҡаралған бюджеттың килем өлөшө 21,63 миллиард һумғаса күтәрелһә, сығымдарҙың 23,01 миллиард һум булыуы көҙаллана. Дефицит - 1,37 миллиард һум тәшкил итәсәк.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**1-2 октябрҙә Парижда ЮНЕСКО-ның штаб-фатирында, шулай уҡ Рәсәй Федерацияһы Илселегендә, Рәсәйҙең фән һәм мәҙәниәт үҙәгендә Башҡортостандың ошо халыҡ-ара ойошма менән хеҙмәттәшлегенең 15 йыллығына арналған "Башҡортостан - Рәсәй ынйыһы" тип аталған оло сара үтә.**




# ПАРИЖДЫ ЛА...
## күрербеҙ

Уның сиктәрендә республиканың мәҙәни, мәғариф, туристик ҡеүәтенә бағышланған күргәҙмә, үҙенсәлекле мәҙәни мираҫ булараҡ бөтөн донъяға билдәле "Шүлгәнташ", "Урал батыр" эпосына арналған "Урал батыр ере" тип аталған түңәрәк ҡор, ике аралағы хеҙмәттәшлек һәм ЮНЕСКО-ның белем биреү проекттарын Башҡортостанда тормошҡа ашырыу буйынса һөйләшеүҙәр һәм сәнғәт оҫталары ҡатнашлығында ҙур концерт ҡаралған.

195 ағза-ил ҡатнашлығындағы презентацияның төп бурысы - Башҡортостандың тарихи-мәҙәни-мәғариф, тәбиғи һәм туристик ҡеүәтен, шул иҫәптән башҡорттарҙың үҙенсәлекле милли мәҙәниәтен, мәҙәниәт һәм мәғариф өлкәһендә донъя кимәлендәге ҡаҙаныштарҙы, тәбиғи һәм мәҙәни мираҫты һаҡлауҙы, телдәрҙең күп төрлөлөгөн, милли кәсепселекте күрһәтеү. Ә республикабыҙҙа күрһәтер нәмәләр бихисап. Мәҫәлән, ЮНЕСКО-ның яҡынса Бөтөн донъя мираҫы исемлегенә инген Шүлгәнташ мәмерйәһен һәм ЮНЕСКО-ның биосфера резерваты булған "Башҡорт Уралы"н үҙ эсенә алған башҡорт халҡының эпик геройы Урал батырҙың тыуған еренең төрлө төсҭәрҙә балҡыған экспозицияһы берәүҙе лә битараф ҡалдырмаҫ, моғайын.

Презентация һөҙөмтәһе булып Башҡортостан Республикаһы менән ЮНЕСКО араһындағы әле тормошҡа ашырылған һәм киләсәккә планлаштырылған мәҙәни, тәбиғи, тарихи һәм документаль мираҫты һаҡлау өлкәһендәге төп программаларҙы һәм проекттарҙы артабан да тормошҡа ашырыу буйынса хеҙмәттәшлектә киләсәктә лә дауам итеү тураһындағы коммюникеға ҡул ҡуйыу торасаҡ. Ул тәбиғи-мәҙәни "Урал батыр ере"н ЮНЕСКО-ның Бөтөн донъя мираҫы исемлегенә индереүҙе, ойошма тарафынан төрки халыҡтарының байрамы булған "Һабантуй"ҙы, башҡорт халҡының милли уйын ҡоралы ҡурайҙы үҙенсәлекле матди булмаған мәҙәни мираҫ ҡиммәтенә эйә элемент сифатында таныуҙы көҙәллай һ.б.

Сәфәр программаһында шулай уҡ Францияларғы Рәсәй Илселегендә француз һәм сит ил эшлекле даирәләре Башҡортостан Республикаһының инвестицион һәм фәнни ҡеүәте менән таныша аласаҡ.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ВЕЛОСИПЕДСЫЛАРҒА... ХӨРРИӘТ

**Баш ҡаланың Ленин районында урынлашҡан Затон биҫтәһендә яңы велосипед юлы асылды. Спорт объекты "Водник" стадионында урынлашҡан. Уның оҙонлоғо ике километр. Йылы миҙгелдә бында велосипедтарҙа һәм роллерҙарҙа, ҡышҡыһын саңғыла йөрөргә мөмкин һәм ул ошо маҡсатта файҙаланыласаҡ та. Трассаның яҡтыртылыуы унда ҡараңғы ваҡытта йөрөү мөмкинлеген дә бирә.**

Яңы велоюлдың сифатын Рәсәй һәм республика ярыштары призерҙары һәм роллерлы саңғы спортсылары һынаны. Бынан тыш, шунда уҡ райондың спорт мәктәптәренең "исем туйы" үтте. Унда ата-әсәләр тренерҙар менән осрашып, күҙмә-күҙ ҡарашып, уларға үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙар биреп, яуаптар алды һәм балаларын секцияларға яҙҙырҙы.

Өфө ҡала округы хакимиәте бындай ҡулса тибындағы велоюлдарҙы ҡаланың һәр районында булдырырға ҡарар итте. Дим районы халҡы Баланово ауылы эргәһендәге оҙонлоғо бер километр булған велоюлды һынап ҡараны ла инде. Совет районында Октябрҙең 50 йыллығы урамындағы велоюл да әҙер тиергә мөмкин. Дөйөм алғанда, велосипед инфраструктураһын үҫтереү программаһы 5 йылға иҫәпләнгән һәм велосипед трассаларының дөйөм оҙонлоғо 150 километр самаһы буласаҡ.

# МЕТРОБУСТА ЕЛДЕРӘСӘКБЕҘ

**Ошо көндәрҙә ҡала округы хакимиәтендә Төркиәнең эшлекле даирәләре вәкилдәре ҡатнашлығында Өфөлә метробус линиялары төҙөү мәсьәләһе буйынса һөйләшеү булып үтте. Үҙ сығышында хакимиәт башлығы Ирек Ялалов ҡала төҙөлөшөнә арналған UrbanБайрам форумында баш ҡаланың транспорт инфраструктураһын үҫтереү буйынса тәҡдимдәр яңғырауын билдәләне. Аныҡлап әйткәндә, халыҡ-ара архитекторҙар һәм инженерҙар муниципалитеттың метробустар һәм тиҙ йөрөшлө трамвай индереүгә ҡағылышлы фекерҙәрен хупланы.**

Бөгөн баш ҡала ошо идеяны тормошҡа ашырыу өсөн инвесторҙар, муниципаль-шәхси партнерҙар эҙләй. Ә Төркиә эшҡыуарҙары Өфөлә метробус юлдары төҙөүҙә проектлау этабынан алып тиҙ йөрөшлө автобустар һатып алып, уларҙы файҙаланыуға тапшырыуға тиклем үҙ иҫәптәренә башҡарырға әҙер булыуҙарын белдерҙе.

Әлеге ваҡытта Башҡортостан климатын иҫәпкә алып, проекттың техник-иҡтисади нигеҙен әҙерләү тураһында яҡынса килешеү төҙәлдө. Әгәр Төркиә компанияһы барлыҡ конкурс процедураларын да уңышлы үтһә, уның етәкселәре был проектты ике йылда тормошҡа ашырырға вәғәҙә бирә.

**Тупланманы Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔1 октябрҙә Республика дауалау-физкультура диспансеры өлкән кешеләр өсөн Асыҡ ишектәр көнө үткәрә. Бында сәғәт 9-ҙан 16 сәғәткә тиклем бушлай консультация алырға мөмкин. Бынан тыш, үҙ аллы киләалмағандар 235-60-07 номерына шылтыратып, Өфө табиптарынан кәңәш һорай аласаҡ. Ҡыҙыу линия 1 октябрҙән 11-нә тиклем 8-15 сәғәттәрҙә эшләйәсәк. Бәйләнеш өсөн телефондар: 233-00-81 (Сәләмәтлек үҙәге); 235-60-07 (реабилитациялау бүлеге); 233-54-70 (спорт-медицина бүлеге); 235-61-36 (профилактика бүлеге). Республика врач-физкультура диспансерының адресы: Өфө ҡалаһы, Блюхер урамы, 1.

✔М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры 21-28 сентябрҙә Ҡабарҙы-Балҡар Республикаһында гастролдәрҙә булды. Театрҙың башҡорт труппаһы үткән миҙгелдәге ике премьераны - балалар өсөн Джанни Родариҙың әкиәте буйынса "Чиполлино" музыкаль спектаклен, өлкәндәр өсөн Флорид Бүләков пьесаһы буйынса "Карт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа" комедияһын тәҡдим итте. Спектаклдәр республиканың биш ҡалаһында күрһәтелде.

✔БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының территориаль идаралыҡтары һәм комитеттары хеҙмәткәрҙәре тәбиғәт ҡомартҡыларын тикшерә. Бындай эш Башҡортостандың айырыуса һаҡланған тәбиғәт территорияларына инвентаризация үткәреүгә әҙерлек сиктәрендә башҡарыла. Сибай территориаль комитеты хеҙмәткәрҙәре тәбиғәт ҡомартҡыларын тикшереүҙе тамамлаған да инде. Баймаҡ, Ейәнсура, Хәйбулла һәм Йылайыр райондарында йөмғеһе 15 тәбиғәт ҡомартҡыһы иҫәпләнә.

✔БР Мәғариф министрлығы ҡарамағында "ҡыҙыу линия" ойошторолдо. Теләгән һәр кеше белгестәргә шылтыратып, уҡыу әсбаптарына ҡағылышлы һорауҙар бирә ала. Бының өсөн түбәндәге телефон номерҙарын йыйырға кәрәк: (347) 273-55-63, (347) 276-31-82.

✔Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы быйыл көҙ үҙенең 45 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Тантаналы сара 25 сентябрҙә Өфө сәнғәт училищеһының Концерт залында үҙасаҡ.

ҠУЛЛАНЫУСЫ ӘЛИФБАҺЫ

# ХАЖ СӘФӘРЕГЕҘ...

## хәүефһеҙ булһын, тиһәгеҙ



**Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, быйыл хажға Башҡортостандан 200 самаһы кеше барасаҡ һәм уларҙың беренсе төркөмө 30 сентябрҙә юлға сығасаҡ.**

Сәғүд Ғәрәбстанындағы ҡатмарлы эпидемиологик хәлде һәм вируслы инфекция менән зарарланыу хәүефен иҫәпкә алып, Өфө ҡала округы хакимиәтенең Халыҡты социаль яҡлау идаралығының ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау бүлеге юлға сығыусыларға түбәндәге иҫкәртеүҙәргә ҡолаҡ һалырға саҡыра:

- миҙгел киҙеүенә тейешле вакцинация үтеү зарур. Уны йәшәү урыны буйынса поликлиникала яһатырға була;

-мотлаҡ рәүештә менингококк прививкаһын - 1-се ҡала поликлиникаһында (Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 4), "Ғаилә вакцинопрофилактика үҙәге" яуаплылығы сикләнгән ширҡәттә (Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 60/2) эшләтергә кәрәк;

- мотлаҡ халыҡ-ара өлгөләге медицина страховкаһын алырға, сөнки Сәғүд Ғәрәбстанында сит ил граждандары өсөн барлыҡ медицина ярҙамы, шул иҫәптән тәүге тиҙ ярҙам да түләүле;

-ваҡытында сығып китә алмауҙан страховкалаған килешеү төҙөргә. Бындай документ килешеү буйынса түләнгән аҡсаны тулыһынса йәки өлөшләтә, әгәр турист аҡларлыҡ сәбәп (туристың үҙенә, туристик операторға һәм страховкаға бәйле булмаған осраҡтарҙа) менән заказ бирелгән һәм хаҡы түләнгән хеҙмәттәр пакеты менән файҙалана алмаһа, кире ҡайтарыуға гарантия бирә;

-сәйәхәт осоронда мотлаҡ рәүештә шәхси гигена ҡағиҙәләрен үтәргә: тын алыу юлдарын, танауҙы һәм ауыҙҙы һаҡлау өсөн маска файҙаланырға; масканы ике сәғәттән артыҡ йәки ҡабаттан файҙаланмаҫҡа; маска ҡулланғандан һуң ҡулдарҙы йыуырға йәки дезинфекцияларға; ашар алдынан ҡулдарҙы йыуырға; Денге лихорадкаһы менән сирләмәҫ өсөн серәкәйҙәрҙән һаҡланыу сараларын күрергә.

Турист түбәндәге осраҡтарҙа юлға сығыуҙан баш тартырға хоҡуҡлы: килешеүҙә күрһәтелгән сәйәхәт шарттары ҡатмарлаштырылғанда; сәйәхәт ваҡыты үҙгәртелгәндә; транспорт тарифтары артҡанда; үҙенә бәйле булмаған хәл-ваҡиғалар килеп тыуыу сәбәпле юлға сыға алмағанда (сирләп китеү, виза биреүҙән баш тартыу һ.б.).

**Хаж ҡылыусылар иғтибарына!**

Рейс нисек тотҡарланыуына ҡарамаҫтан, авиация ташыусыһы федераль авиация ҡағиҙәләре талаптарына ярашлы, 7 йәшкә тиклемге балаһы булған пассажирҙарға әсә һәм бала бүлмәһен бушлай бирергә; багажды һаҡлау ойошторорға бурыслы.

Рейс тотҡарланғанда:

- ике сәғәттән артһа - пассажирға телефондан ике тапҡыр шылтыратыу йәки электрон почта аша ике хәбәр ебәреү мөмкинлеге бирелергә, һалҡын эсемлектәр менән тәьмин итергә тейештәр;

- тотҡарланыу дүрт сәғәттән артһа - йылы аш менән тәьмин итергә, көндөҙ һәр алты сәғәт һайын, төнөн һәр һигеҙ сәғәт һайын ашатырға тейештәр;

- алты сәғәттән артһа - ҡунаҡханала урынлаштырырға (рейсты төнөн - алты, көндөҙ һигеҙ сәғәт көткәндә), ҡунаҡханаға өҫтәмә түләү ҡуйылмағанда аэропорттан ҡунаҡханаға тиклем һәм кире юлды транспорт менән тәьмин итергә тейештәр.

Әгәр авиакомпания һуңлау ваҡытын минимумға, ә дәғүәләрегеҙҙе минимумға төшөрөргә теләп, һеҙҙе икенсе маршрут йәки икенсе компанияның рейсы менән оҙата икән, был эш мотлаҡ авиакомпанияның йәки аэропорттың иҫәбенә башҡарыла. Өҫтәмә түләү тураһында һүҙ ҙә булырға тейеш түгел.

Әгәр авиарейстың тотҡарланыуы һөҙөмтәһендә сәфәрегеҙ ҡыҫҡара икән, Һеҙ туроператорҙан түләнгән, әммә файҙаланылмаған хеҙмәттәр өсөн аҡса ҡайтарыуҙы талап итә алаһығыҙ. Бының өсөн авикомпания вәкиленән йәки аэропорт хеҙмәткәрҙәренән билетта рейстың тоҡарланыуы тураһында билдә ҡуйҙыртығыҙ. Был һуңынан дәғүә яҙырға йәки уны судҡа бирергә теләгәндә кәрәк буласаҡ. Аныҡ осоу ваҡытын авиакомпания/аэропорт вәкиленән ҡулдан яҙып, штамп менән раҫлауын һорағыҙ.

Ошо күрһәтмәләрҙе теүәл үтәп, Һеҙ Сәғүд Ғәрәбстанына сәйәхәтегеҙҙе хәүефтән азат итәсәкһегеҙ!

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## АУЫЛ МӘКТӘПТӘРЕ ЙӘШӘРМЕ?

**"Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"закон нигеҙендә ауыл мәктәптәренең күпселеге ябылырға тейеш, тип ишеттем, был дөрөҫмө?**

Юҡ. Яңы закон мәктәптәр эшмәкәрлеген ҡайтанан ойоштороп ҡороу тәртибен йәки ябыу мәсьәләһен көйләй. Был бөтә урындарҙа ла мәктәптәрҙе ябыу тигәнде аңлатмай. Былдай ҡарар махсус комиссия һығымтаһына нигеҙләнеп ғәмәлгә ашырыла. Ауылдарҙа мәктәптәр урындағы халыҡ фекерен һанға һуҡмаҫтан ябылырға тейеш түгел. "Мәғариф тураһында" РФ законының 22-се статьяһына нигеҙләнеп, мәктәпте яптырмай алып ҡалырға мөмкинлек бар.

## АСПИРАНТУРА ҺАҠЛАНАМЫ?

**Рәсәйҙең мәғариф буйынса яңы законында юғары белем биреүҙең бакалавриат һәм магистратура кимәлдәре индерелеү менән бәйле аспирантураның кәрәге ҡаласаҡмы?**

Яңы законда бакалавриат менән икенсе кимәл - специалитет һәм магистратура һаҡланып ҡала. Шуның менән бергә ошоға тиклем вуздан һуңғы һөнәри белем биреү кимәле - аспирантура - хәҙер юғары белем биреүҙең айырым, өсөнсө кимәле - юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләү формаһына әүерелә. Был кимәл хәҙер фәнни-педагогик кадрҙар (аспирантура, адъюнктура), ординатура һәм ассистентура-стажировка программалары әҙерләү бурысын үҙ эсенә ала. Әйткәндәй, был яңылыҡ түгел, ул беҙҙең законда 2011 йылдан ғәмәлдә.

## ЛИЦЕЙ ҺӘМ ГИМНАЗИЯЛАР МЕНӘН НИ БУЛАСАҠ?

**Балаларым гимназияла уҡый. Киләһе йылдан лицей менән гимназияларҙы ябалар, ябай мәктәптәр генә ҡала, тиҙәр...**

Законда лицей һәм гимназияларға ҡағылышлы аныҡ кына бер ни ҙә әйтелмәй. Белем биреү учреждениелары юғары кимәлдәге программаға күсереләсәк, был иһә уларҙың шуға ярашлы юғары кимәлдә финансланыуын күҙҙә тота. Был дөйөм урта белем биреү учреждениеларының статусына түгел, ә уҡытыу буйынса ҡаралған нагрузкаға бәйле буласаҡ.

## ҠАБУЛ ИТЕҮ ТӘРТИБЕ

**Киләһе йыл ҡыҙым вузға инергә йыйына. Юғары уҡыу йортона инеү тәртибе үҙгәрәсәкме?**

2013 йылғы Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре дүрт йыл буйы ғәмәлдә буласаҡ.Теге йәки был вузға инеү өсөн кәрәкле БДИ балдарының минималь һанын һәр вуз үҙаллы билдәләү хоҡуғына эйә. Был юғары белем программаһын үҙләштереүҙә ауырлыҡ тыуҙырасаҡ түбән һөҙөмтәле абитуриенттарҙың әлеге вузға күпләп үтеүенә юлды ябасаҡ. Икенсе үҙгәреш льготалы урындарға ҡағыла. Яңы закон буйынса фәҡәт олимпиадасылар, атап әйткәндә, дөйөм белем биреү фәндәренән уҡыусыларҙың Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара олимпиадаларында еңеүселәр һәм призерҙары ғына ҡабул итеү имтихандарһыҙ вузға инә ала. Инвалид балалар, 1-2-се төркөм һәм бала саҡтан инвалидтар, хәрби хеҙмәт үткән осорҙа хәрби травма йәки сир һөҙөмтәһендә инвалидлыҡ алған кешеләр ҡабул итеү имтихандарын уңышлы тапшырған осраҡта конкурстан тыш ҡабул ителә. Башҡа төр льготалар менән файҙаланыусы категориялар вузға конкурстан тыш уҡырға инеү хоҡуғын юғалта, уның ҡарауы улар федераль бюджет иҫәбенә юғары белем биреү федераль дәүләт мәғариф ойшмаларының әҙерлек бүлектәрендә уҡыу хоҡуғына эйә була.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Гипертония

❖ Тищенко тәжрибәһе. 5 ҡалаҡ ҡарағай йәки шыршы энәләрен (быйылғы йылғы йәш энәләр булһын), 2-3 ҡалаҡ ваҡланған гөлйемеш емеше, 2 ҡалаҡ һуған ҡабығы (әйткәндәй, һуған ҡабығы төнәтмәһе пиелонефритты ла дауалай) алып, 0,7 литр һыу ҡойоп, ҡайнау хәленә еткерергә һәм 10 минут талғын утта ҡайнатырға. Төнгөләккә урап, тағы төнәтергә. Һөҙөргә. Көн дауамында һыу урынына 0,5 - 1 литр эсергә. Дауаланыу ваҡыты 4 ай. Әгәр ҙә пациенттың бөйөрҙәре һау икән, төнәтмәгә һуған ҡабығы ҡушмаҫҡа ла була. Инсульт булғанда параллель рәүештә көн һайын 2 лимон ҡулланырға. Ярты лимонды ҡабығынан таҙартып, ваҡ итеп турап, ылыҫ төнәтмәһе ҡойоп, бер юлы эсергә. Мөмкин булһа, төнәтмәне ашар алдынан бер сәғәт алда йәки бер сәғәт һуң эсегеҙ. Ошо рәүешле лимон менән ике аҙна дауамында дауаланырға. Хәл ауыр булған саҡта өс аҙнаға тиклем һуҙырға була.

❖ Һарымһаҡ - 30 грамм, омела үләне - 30 грамм, кипкәр (сушеница) - 20 грамм, энәлек сәскәһе һәм емештәре - 20-шәр грамм, ирәүән (валериана) тамыры - 20 грамм, ҡырҡбыуын (хвощ полевой) үләне - 30 грамм, ҡайын япрағы - 20 грамм. Ҡушып бер һауытҡа һалырға, болғатырға. Өс ҡалаҡ үләнгә бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә, һуңынан һөҙөргә. Ашар алдынан 30 минут алда көнөнә 3 тапҡыр стакандың дүрттән өс өлөшө күләмендә эсергә.

❖ Алма һеркәһе артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтергә, нервылар көсөргәнешенән ярҙам итә. Көнөнә өс тапҡыр 1 стакан һыуға 2 балғалаҡ алма һеркәһе өҫтәп эсергә.

❖ Гипертония кризы, инсульт алды ваҡытында, баш мейеһенә ҡан һауыуҙың беренсе билдәләре мәлендә һөлөк ҡуйыу файҙа бирә.

❖ Даими рәүештә анар һуты эсеү ҡан баҫымын яйлап төшөрөргә мөмкинлек бирә.

❖ Ярты стакан балан емешенә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 8-10 минут ҡайнатырға, һөҙөргә, 3 ҡалаҡ бал өҫтәп, болғатырға. Көнөнә 4 тапҡыр 100 мл-лап ҡулланырға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Эс-бил ауырыуҙары менән бәйле им-том

**Биҙгәк әпсене**

*Тимер көрәк менән ҡырырмын,*
*Тимер тырма менән тырнармын,*
*Тимер балта менән сабырмын,*
*Тимер һепертке менән һеперермен.*
*Ҡырҙым, тырнаным,*
*Саптым, һеперҙем.*

**Тимер име.** Биҙгәкте тимер әйбер менән ҡыуыу йолаһы ла бар. Йола буйынса, биҙгәк менән ауырыған кешенең эргәһенә, баш осона тимерҙән эшләнгән әйбер һалғандар, һалғанда ошо әпсенде лә әйткәндәр:

*Аҡ атҡа атланып ҡыуырмын,*
*Ҡара атҡа атланып ҡыуырмын,*
*Күк атҡа атланып ҡыуырмын,*
*Тимер бысаҡ менән ҡырырмын,*
*Тимер тырма менән тырнармын,*
*Тимер һепертке менән һеперермен,*
*Ҡырам, тырнайым, һеперәм,*
*Тфү, тфү, тфү!*
*Бына һиңә баш, баш урынына баш.*
*Инде (фәләнде) ташла, ошо ҡурсаҡты тот!*

**Кинәт ҡурҡытыу менән имләү.** Биҙгәкте ҡурҡытып имләү таралған. Ауырыуҙың ҡуҙғыған сағында кешенең эргәһендә генә мылтыҡ атҡандар, көтмәгәндә һыуыҡ һыу һипкәндәр, өҫтөнә үлгән йылан ырғытҡандар, үҙен һыуға ташлағандар. Ышаныуҙар буйынса, Биҙгәк эйәһе ҡурҡып ҡаса икән.

**Тапмаға бетеү.** Тапма ауырыуы ваҡытында бетеү яҙып, өшкөрөп тә имләйҙәр. Муйынына аҙаҡ бетеүҙе тағып ҡуялар.

**Ҡурсаҡ менән имләү.** 1. Биҙгәк булһа, төрлө төҫтәге сепрәктәрҙән ҡурсаҡ эшләгәндәр. Шуны ауырыуҙың баш осонда йөрөткәндәр ҙә юл сатына алып ырғытҡандар. Ҡурсаҡ йөрөткәндә әпсен дә әйткәндәр:

*Бына һиңә тән, бына һиңә йән,*
*Йән урынына йән, тән урынына тән.*

2. Биҙгәккә Ырымбур башҡорттары матур бала кеүек ҡурсаҡ яһай. Уға төрлө төҫтәге таҫмалдар, сепрәктәр бәйләй. Шуны биҙгәк тотҡан кешенең ҡуйынына һалалар ҙа, аҙаҡ алып, урамға сығарып ташлап китәләр. Башҡа төбәктәрҙә ҡурсаҡты ауырыуҙың баш осонан әйләндереп алалар. Ҡурсаҡ менән имләгәндә:

*Бына һиңә йән, йән урынына йән,*
*Баш урынына баш. Инде бынан сығып кит!*
*Ҡурсаҡҡа күс, ҡурсаҡты тот!*

- тип һамаҡлайҙар. Ышаныуҙар буйынса, биҙгәк (тапма) ошо ҡурсаҡ менән китә икән.

**Пискәк (малярия) ауырыуынан им.** Пискәк ауырыуынан кешене ҡурҡытып терелтергә тырышҡандар. Ауырыуҙың көсәйгән минутын һайлап, уның ҡолаҡ төбөндә мылтыҡ атҡандар. Боронғолар, ҡурҡыуҙан ауырыуҙың яуыз рухы сығып ҡаса, тип уйлаған.

**Өс төрлө әйбер менән имләү**. Кешенең эсе ауыртһа, өс төрлө әйбер (таҫтамал, ойоҡ, яҫтыҡ) менән һуғып та имләгәндәр, һуҡҡанда:

*Ай ҡайта, көн ҡайта,*
*Ел эйәһе, һин дә ҡайт!*
*- тип һамаҡлағандар.*

**Осан име.** Дим буйы башҡорттарында осан һүҙе лә осрай. Шишмә районы Суҡраҡлы ауылы инәйҙәре һөйләүенсә, эс төшөп ауыртһа, уны осан тиҙәр һәм үрҙә килтерелгән әпсендәргә оҡшаш әпсен әйтеп, орсоҡ, ҡайраҡ, энә менән имләгәндәр. Имләгәндә ошо әпсенде әйткәндәр:

*Май кеүек иреһен, көл кеүек туҙһын,*
*(Фәләндең) осаны иреһен, туҙһын,*
*Име-томо шул булһын!*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...

# ОЛО ЙӘШТӘГЕЛӘРГӘ...

## байрам да, иғтибар ҙа кәрәк



**Советтар Союзы тип аталған бөйөк илебеҙ тарҡалған буталсыҡ йылдарҙа Оло йәштәгеләр көнө булдырып, уны байрам итә башланылар. Беҙҙең быуын, 50-се йылдарҙа тыуғандар, ул саҡта 40 йәшкә саҡ аяҡ баҫҡайныҡ. Ул ваҡытта оло йәштәгеләр - күкрәктәрендә орден-миҙалдары сыңлаған Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, уларҙың хәләл ефеттәре, шулай уҡ ғүмер буйы яңғыҙлыҡ касаһынан утлы ғазап эсеп, ҡайнар күҙ йәштәрен түгеп йәшәгән тол ҡатындар ине.**

Хәҙер ҙә оло йәштәгеләр күп, иғтибар ҙа етерлек кеүек. Әммә эш ваҡытында пенсия түләүҙә генә түгел. Эскерһеҙ ярҙам, ихлас аралашыу, иртәнән кискә тиклем хеҙмәт урынынан ҡайтып инә алмаған балалар иғтибары етмәйҙер ул өлкән йәштәгеләргә.

Оло йәштәгеләр быуыны күп осраҡта бик ихлас, аралашыусан, бер ҡатлы ла. Бының менән ҡайһы бер яман уйлы, еңел байыр өсөн хилафлыҡ юлына баҫҡандар оҫта файҙалана, өлкән йәштәгеләр уларҙың мәкерле тоҙағына эләгеп тора: алдаҡҡа ышанып, һуңғы аҡсаларынан яҙалар, хатта ғүмерҙәренә хәүеф янаған осраҡтар ҙа бихисап.

Матбуғатта Ололар көнө тигән байрамды тәнҡитләүселәр ҙә осрап тора: нимә, өлкәнәйгән яҡын кешеңде йылына бер тапҡыр ғына иҫкә алып ҡуйыр өсөнмө был байрам, тиҙәр. Минеңсә, был дөрөҫ фекер түгел. Төрлө һөнәр кешеләрен тәбрикләгән, уларға йылы ҡарашыңды, асыҡ сырайыңды ғәҙәттәгенән артығыраҡ күрһәткән тәғәйен бер көн булыуы бер ҙә насар түгел дә инде. Ололар көнөн кеше ғүмеренең һөҙөмтәле, тәрән йөкмәткеле миҙгеле барлығын ейәнейәнсәрҙәребеҙгә лә, ул-ҡыҙҙарыбыҙға ла, кейәү-килендәребеҙгә лә көмөш сәсле олатай-өләсәйҙәренә, күрше йәшәгән инәйҙәре һәм бабайҙарына, кәңәшсе-дуҫтарына тағы ла мөләйемерәк, хәстәрлеклерәк булыу кәрәклеген иҫтәренә төшөрә торған һәйбәт бер йола, тип ҡабул итергә кәрәк.

Оло йәштәгеләр күпте күргән, күпте кисергән. Улар ғүмер ҡәҙерен айырыуса нескәлек менән баһалайҙар, шуның өсөн уларҙың кәңәше алтындан да ҡиммәтерәк, тип ҡабул итеү кәрәк.

Мин атайымдың әсәһен, Мәстүрә ҡәртнәйемде, бөгөнгөләй асыҡ хәтерләйем. Ул фани донъя менән хушлашҡанда мин саҡ 12-се йәш менән бара инем. Бик аҡыллы, яғымлы, сәсән телле кеше ине. Уның бер-ике генә фотоһүрәте һаҡланған. Бер фотоһүрәтен мин яңыртып алғанмын, йыш ҡына уға ҡарап ултырам. Был фоторәсемдә уға илле биш тирәһе булғандыр. Күҙ алдыма теп-тере булып килеп баҫа ҡәртнәйем. Шундай сибәр: асыҡ һоро төҫтә ине уның күҙҙәре, танауы, ауыҙ тирәһе һүрәт итеп матурлап эшләп ҡуйғандай ыҡсым, торғаны кәртинкә инде! Һомғол буйлы, төҙ һынлы. Француз яулығының маңлай өҫтөндәге ситендә көмөш тәңкәләре, асыҡ сырайлы йөҙөндәй, балҡый, сәс толомдарындағы сәсүргесендә тәңкәләр атлаған һайын сыңлап торор ине. Ул һәр ваҡыт, һары таңдан тороп, Хәже йәиһә Хөсәйен шишмәһенән һыу килтереп, самауыр ҡуйыр ине. Самауырҙы, башҡа һауыт-һабаны Саған-йылға буйына төшөрөп, ҡом менән ялтыратҡансы ышҡый торғайныҡ. Еләк-емеш йыйырға әүәҫ булды. Ҡәртнәй әйтеп кенә өлгөрһөн, беҙ ҡустым менән, ике ҡанат ҡуш ҡойроҡ (өләсәйебеҙҙең һүҙе шулай ине), артынан эйәрергә генә торабыҙ, ер ситенә китергә әҙербеҙ.

Ул бик оҫта әкиәтсе ине. Үгәй әсә, етем ҡыҙҙар, убырлы ҡарсыҡ тураһында, һарыҡ-бүреләр тураһында әкиәттәрҙе күп һөйләй торғайны. Бер ҡыҙҙың аҙбарҙа бикле торғанында ат ҡылынан скрипка яһап уйнап ебәргәне тураһындағы әкиәте ныҡ иҫтә ҡалған. Әммә башын да, аҙағын да бер ҙә иҫемә төшөрә алмайым. Тик шуныһы аңлашыла: изге күңелле мөләйем өләсәйебеҙ беҙҙең күңелгә саф орлоҡтар һалған. Һуҡмаҡтан китеп барһаҡ, өләсәй "Арҡыры ятҡан ботаҡ йә кәртәне буй һалыр кәрәк, балаҡайҙарым, һеҙҙең арттан килгән кеше һөрләкмәҫ", "Ағас япрағын да, ботағын да, сайҡалып үҫеп ултырған гонаһһыҙ сәскәне лә сәбәпһеҙ өҙмәгеҙ, рәнйерҙәр", тиер ине. Бер ваҡыт урманда йылан балалағанын ҡарап торғайныҡ. Ул, ағас олонона һылашҡан да, ҡуҙғалмай тик тора, ә кескәй генә йылан балалары ергә төшәләр ҙә юғалалар. Ҡәртнәйебеҙ йылан балаларын эй йәлләй, "тиҙерәк ҡасығыҙ, әтеү йотоп бөтөрөр инәйегеҙ", ти. Әллә ысын булды, әллә әкиәт, бик томанлы хәтерләйем.

Ҡәртнәйем шулай уҡ арыу-талыу белмәгән изгелексән кендекәй ҙә булды (беҙҙә кендек инәһен шулай тип йөрөтәләр). Ул яҡты донъяға ҡабул иткән бәпестәр әллә күпме булғандыр. Иҫ киткес шәп ураҡсы ла, ирҙәр тиңендә кәбән һалыусы ла булған ул. Ә аш-һыуға, тегенгә оҫталығы! Ул әҙерләп ашатҡан талҡандың, кеҫәлдең, ҡороттоң, ҡаҙан кәкреһенең, балан бәлешенең, ҙур ит бәлешенең тәме һаман тел осонда!

Өләсәйем килендәрен, минең әсәйемде һәм еңгәмде, бер ҙә яман күреп ултырманы, һарыплашып, сүп өҫтөнә сүмәлә өйөп маташманы, улдары менән килендәренең араһына ел дә үткәртмәй йәшәтергә тырышты. Кейәүҙәренә һүҙ әйтеү ҡайҙа ул, үҙ улылай күреп, ҡоймаҡкәкүркә менән һыйлап, маҡтап-хуплап ҡына торҙо.

Хәҙер үҙебеҙ өләсәй-олатай инде. Шөкөр, аҡ шалҡандай булып ейәнсәрҙәребеҙ, тубырсыҡтай тәгәрләп ейәндәребеҙ үҫеп килә. Халыҡсан хаҡлыҡ, ғәҙеллек тәрбиәләгән өләсәйҙәребеҙ-олатайҙарыбыҙға тиңләшергә яҙһын! Беҙҙән өлкәнерәк ололарға, беҙҙең йәштәге ҡорҙаштарға Оло йәштәгеләр байрамы айҡанлы сәләмәт булып, мөмкин тиклем оҙағыраҡ балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ уңыштарын күреп йәшәү бәхетен теләйем. Киләсәк тоҡомдарыбыҙ үҙебеҙгә ҡарағанда ла бәхетлерәк булһын, ҡулдарына эш бәхете тейһен, йөрөгән юлдары тик изгелек менән тулы булып, гел уңып ҡына торһон. Рәсәй иле дөрөҫ юлды һайлаһын, Тыуған Башҡортостаныбыҙ йәшәһен, шифалы, һутлы телебеҙ инештәре ҡоромаһын, быуаттар дауамында яңғырап торһон! Балаларыбыҙ башҡорт телен яратһын, ҡәҙерләһен! Тыуған телдә яңы әҫәрҙәр ижад ителһен, шул әҫәрҙәрҙең тоғро уҡыусылары ла булһын!

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА, уҡытыусы.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# САТЫРМАНДАЙ...

## йәбешмә

**Дәү биреһе** - дыуамал, уйламай эшләй.
**Сикәһен бирә** - ситкә тибә, үҙ итмәй.
**Ыжбан баш** - ҙур, иләмһеҙ башлы (жбан - ағас биҙрә).
**Өңкәйтеү** - күп йомшап йонсотоу.
**Эт тылҡаһы** - ныҡ әрһеҙләү.
**Үрәсәһе сиселгән** - яңылышҡан, юлдан яҙған.
**Үрәпсей** - юҡҡа-барға һүҙ сығара, сабырһыҙ.
**Упсым** - бөтөнләй юҡты һөйләй.
**Тәрәш** - йөн, киндер тарағы.
**Бынса** - бигерәк инде, бынса юҡты һөйләп.
**Ирәйеп китеү** - нығыныу, кеше ҡорона йәки мал ҡорона инеү.
**Сатырмандай йәбешә** - ныҡ бәйләнә, ҡотолоп булмай.
**Ҡаҡлығып йөрөү** - үҙенә урын тапмай, ары-бире, унда-бында һуғылып йөрөү.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

**"Киске Өфө"нөң былтырғы бер һанындағы "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһында: "Беҙҙең башҡорттарҙа шәжәрәнде, үҙендең ырыу-ара тарихыңды өйрәнеү менән ҡыҙыҡһыныу көсәйә бара. Был беҙгә нимә бирә?"- тигән һорау ҡуйылғайны. Ошонда уҡ ҡайһылыр бер респонденттың яуабы сәпкә тейгәйне: "Дәүләттең милләттәрҙе һаҡлау механизмы юҡлығы фактын да танырға кәрәк. Шуға күрә лә милләттең үҙ-үҙен һаҡлау инстинкты ла сағылалыр тарихҡа ҡайтыу күренешендә..."**




# ШӘЖӘРӘЛӘР...

## милләтте һаҡлауҙың бер ысулы

Был, һис шикһеҙ, шулай. Милләттәргә мөнәсәбәттең аныҡ миҫалдарын үҙебеҙҙең елкәлә татып үҫтек тәбаһа. Еребеҙгә һыйыныу урыны эҙләп килеп урынлашҡандар менән ерле башҡорттоң нисә быуат бергә йәшәүенең һөҙөмтәһе - башҡорттарға ҡарата "нацмен" (национальное меньшинство) атамаһы барлыҡҡа килеүе генә лә күпте һөйләй. Ошо шарттарҙа шәжәрәләргә иғтибар артыуы тәбиғи хәл һәм милләттең үҙен-үҙе һаҡлауының бер әһәмиәтле ысулы.

Мин үҙем ауылыбыҙҙың тарихын өйрәнеүгә байтаҡ көс һалған кешемен. Ошоноң һөҙөмтәһе итеп, ауылыбыҙҙағы бөтөн нәҫелдәрҙең тулы шәжәрәһен төҙөүгә өлгәштем. Ауылыбыҙ Мәкәш исемен йөрөтә. Ҡайҙан килеп сыҡҡан был исем, нәмә аңлата, Мәкәш исемле кеше ҡайһы дәүерҙә йәшәгән, ни өсөн был исем тик ауыл атамаһында ғына ҡалған, ниңә бындай исемле ир-аттар хәҙер осрамай? Башҡорт шәжәрәләрендә Мәкәш исеме төрлө варианттарҙа бирелә: юрматыларҙа - Моҡас, Мекәш, Микәш, Муҡас, Мәтәш; мендәрҙә - Әкеш, Мөлкәш һ.б.

Ололарҙан ҡалған хикәйәттәрҙә Мәкәш ниндәйҙер бер эпик герой дәрәжәһендәге батыр, ҡасаҡ булған, тип һөйләнелә. Тәтегәс бейҙең батыры булып, күсәк һуғышында еңгән, тип тә һөйләр булғандар. Ғөмүмән, шәжәрәләрҙә ҡыҙыныу ҡыҙыҡлы ғына асыштар, һығымталар яһатты. Асыҡланыуынса, беҙҙең ерлектә йәшәгән башҡорт ырыуҙары мең һәм юрматыларҙың айырым быуындары бергә ҡушылып, уларҙың уртаҡ вариҫтары иҫәпләнә. Ауылыбыҙға исем биргән Мәкәш исемле олатабыҙҙың тарихы нәҫел тамырҙары Ҡәзәнфәр бей вариҫтарына барып тоташыуы бәхәсһеҙ. Ябай халыҡ телендә, унан инде хатта ғилми һәм рәсми мәғлүмәттәрҙә Ҡәнзәфәр исеме менән инеп киткән был шәхестен шәжәрәһе ифрат ҡыҙыҡлы һәм әһәмиәтле. Уның тураһында башҡорт шәжәрәләре әһәмиәтле мәғлүмәт һаҡлай.

Шәжәрәһен, хаҡ тамырҙарын, шул арҡала ысын милләтен белмәй йәшәгәндәр күп беҙҙә. Үҙем ныҡлап шәжәрәләр тарихын өйрәнә башлағас, былға ныҡлап инандым. Был бөтә көнбайыш Башҡортостан башҡорттарына хас күренеш. Бәләбәй, Бишбүләк, Йәрмәкәй, Миәкә һ.б. төбәктәрҙә йәшәгән халайыҡтарҙың күбеһе үҙҙәрен татар милләте тип билдәләп, үҙҙәренең хаҡ тамырҙарын белмәй йәшәй. Миңә был тарафтарҙа бер ни тиклем булырға тура килә һәм ошо турала һүҙ ҡуҙғатһаң, ошо башҡорттар ғүмер буйы милләтсе булды инде, тигән йөмлә менән ҡайһы берәүҙәр үҙенең мөғлүмәтһеҙлеген милләтселеккә япһара һәм үҙен хаҡлы тип уйлай. Әммә ләкин тарихи үткәндәрҙе хатта Аллаһы Тәғәлә лә үҙгәртә алмай, ти бер аҡыл эйәһе. Уйлай китһән, боронғолоған иҫбатлап йәшәгән ошо ҡәүемдең балаһы булыу оло ғорурлыҡ түгелме икән ни? Бик йыраҡта ла ятмаған 6-7 быуын олатайҙарҙың шәжәрәләрен алып барлап, нәҫелнәсәбендең тарихи хәтерен тергеҙеү ата-олатайҙар алдындағы изге бурыс бит инде ул.

Ошо урында үҙебеҙҙең ауыл тарихынан бер сәхифә. 1771-1772 йылдарҙа ауылға бер ҙур ғына типтәр ғаиләһе күсеп килеп урынлаша. Тәү башта урындағы халыҡ уларҙы татарҙар тип уйлай, сөнки улар һөйләшендә тел айырмалығы була. Ләкин улар башҡорт типтәрҙәре була һәм үҙҙәренең сығышын алып килгән шәжәрәләре менән иҫбатлай. Ошо шәжәрәнең 30-сы йылдарға тиклем Мәкәштең мәҙрәсә стенаһында эленеп тороуы билдәле. Ошондай уҡ тирегә яҙылған шәжәрәләре менән Ҡоръятмаҫ ауылына ла типтәрҙәр килеп урынлаша. Уларҙың туранантура Ҡәзәнфәр бей сылбырына барып тоташыуы шәжәрәләрендә билдәләнгән була. Беҙҙең ауылға күсеп килгән типтәрҙәр былай тип һөйләр булған: "Күп быуын элек беҙҙең олатайҙар Әлмәт яҡтарында йәшәгән, урыҫтарҙың суҡындырыуға бойһонмаған, ерһеҙ ҡалған башҡорттар, тота килеп беҙҙе "ясашный" тип яҙа башлағас, беҙ мең аҫабаларына килеп йығылырға булдыҡ һәм шәжәрәбеҙ менән уларға туғанлыҡты күрһәттек". Тимәк, ассимиляцияға бирелергә, "ясашный" булырға теләмәгән башҡорттар боронғо аҫаба ҡәрҙәш-ырыуҙаштары төбәгенә килеп урынлаша.

Һәм тағы. Нишләптер боронғо шәжәрәләр тик ғалимдарҙың эҙләнеү даирәһе тип ҡарала, әммә ләкин башҡорт тарихы ауылдар тарихында ята һәм һәр башҡорт ауылы үҙенең үткәнен барлағанда ошо шәжәрәләрҙән дә мөһим мәғлүмәт таба ала. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың ҡәҙерен белмәйбеҙ әле беҙ. Ошоноң менән бер рәттән, күп тарихи мәғлүмәттәр ер-һыу атамаларында ла һаҡланып ҡалған, ләкин уларға тарихсы-ғалимдар етди әһәмиәт бирмәй. Ә урындағы эҙләнеүселәрҙән фәнни мәғлүмәт йыраҡ, күп исемдәр үҙгәртелеп, дөрөҫ яҙылмайынса, буталсыҡлыҡ барлыҡҡа килтерә. Урындағы крайҙы өйрәнеүселәр үҙ белдеге менән, фәҡәт шәхси ҡыҙыҡһыныу илһамы менән эшләй, уларҙың күп эҙләнеүҙәре эҙһеҙ юғала. Беҙҙең күрше ауыл Ҡоръятмаҫтың тарихын Ғәлимйән Шәйәхмәтов ағай өйрәнә башлап, ауыл зыяратындағы боронғо ҡәбер таштарын табып, ерләнеү ваҡытын бынан 1000 йыл элек булған, тип, ошо ташъяҙма менән дәлилләгәйне. Көнбайыш Башҡортостан тарихын өйрәнгәндә был бик мөһим факт, әммә ул шулай билдәһеҙ көйө ҡалды.

Ошоға оҡшаш дәлилдәрҙе, ер-һыу атамаларын башҡа сығанаҡтар менән бәйләп эҙләнеүҙәр алып барғанда тарихнамә бик нигеҙле, хәҡиҡый күренеш булыр ине. Бындай нигеҙле эҙләнеүҙәр йәш ғалимдарҙың ғына ҡулынан килеләр, сөнки уларҙың ваҡыт запасы бар һәм оло мәғлүмәтле фәнни етәкселәре бар, ә маҡсатлы эҙләнеүҙәре өсөн былар бик мөһим.

**Шулай итеп, башҡорт шәжәрәләре мөһим мәғлүмәт һаҡлай. 2002 йылда Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә 2 мең генә тираж менән баҫылып сыҡҡан шәжәрәләр китабы, әлбиттә, ихтыяжға яуап бирмәй, ә 1960 йылда сыҡҡаны хәҙер инде бик һирәк кешелә һаҡлана. Ошо 2002 йылда сыҡҡан китапта иҫкәрмәләр бик күп, әммә ләкин улар йыйынтыҡҡа инмәгән һәм был хәл уның ҡиммәтен төшөрә. Ошо боронғо башҡорт шәжәрәләрен бөтә иҫкәрмәләре менән тулыландырып, йәнә башҡорт телендә баҫып сығарыу бик әһәмиәтле булыр ине.**

Клара ХӘМИҘУЛЛИНА.
Дәүләкән районы
Мәкәш ауылы.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың ризығы

**Талҡан** - ваҡ итеп ярҙырылған һәм ҡыҙҙырылған арпа йәки бойҙай ярмаһы май йәки ҡаймаҡ ҡушып, эҫе һыуҙа бүрттереп йомшартыла.

**Ҡурмас** - киндер орлоғо ҡушып ҡыҙҙырылған арпа. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ризығы; көнсығышта ҡурмас - бойҙайҙан әҙерләнгән талҡан төрө.

**Әүмәлә** (сүкәмәс) - бик йыш ҡунаҡтарҙы һыйлау өсөн файҙаланыла, түбәндәгесә әҙерләнә: ҡайнап торған ҡаймаҡҡа бер туҡтауһыҙ болғап тороп арпа йәки арыш оно һалына. Һөҙөмтәлә бер аҙ тоҙланған һәм туҡлыҡлы майлы бутҡа барлыҡҡа килә.

**Йыуаса, бауырһаҡ** - сөсө, ғәҙәттә бойҙай ононан баҫылған ҡамырҙы йәйеп, уны ваҡ ҡына итеп ҡиҫеп, ҡайнап торған туң майҙа ҡайнатыла. Йыуаса бешерелеп, тоҡтарҙа һаҡлана; ул һәр ваҡыт ҡунаҡтарға сәй эскәндә ултыртыла.

**Сәк-сәк** - байрам, туй ризығы. Туғылған йомортҡаларға он һалып сөсө ҡамыр әҙерләнә; ул йоҡа таҫмаларға йәйелә һәм урман сәтләүегеҙурлығында киҫәктәргә ҡырҡылып, ҡайнар майҙа бешерелә. Һыуынғас, уларҙы бал менән болғайҙар. Бал уларҙы беректереп тотоп тора.

**Ҡоймаҡ** - ғәҙәти ҡоймаҡтар. Табала, майҙа бешерелә. Көндәлек ризыҡ түгел, бары тик ҡунаҡтар килгәндә генә әҙерләнә.

**Шәңкә** - себер бәрәмәсенең бер төрө.

Ҡасандыр башҡорттарҙың туҡланыуында мөһим урын алып торған һөт продукттары XX быуат башына ла үҙҙәренең әһәмиәтен юғалтмай. Һөттән тыш, башҡорттар ҡаймаҡ, ҡатыҡ, эремсек, май һәм ҡорот ҡуллана. Бейә һөтөнән Башҡортостандың билдәле өлөшөндә - ҡымыҙ, һыйыр һөтөнән айран эшләйҙәр.

**Һөт** -ҡайнатылмаған һыйыр йәки кәзә һөтөн башҡорттар ризыҡ итеп бик һирәк ҡуллана. Сәйгә мотлаҡ ҡайнатылған һөт ҡуялар.

**Ҡаймаҡ** - шулай уҡ сәй эскәндә ҡуйыла, ҡайнатылған һөт һәм ҡаймаҡтан эшләнә йәки ҡайнатылған һөттән өҫтөнән алынған ҡуйы күбектән тора. Һыуынған ҡаймаҡ тәмле ризыҡ булып иҫәпләнә.

**Эремсек** - ғәҙәти эремсек ризыҡ булараҡ бик һирәк ҡулланылған. Ғәҙәттә, ул ҡорот итеп әҙерләнгән.

**Ҡатыҡ** - ҡайнатылған һөттән эшләнгән. Билдәле температураға еткәнсе һыуытылғандан һуң айран йәки элек ойотолған ҡатыҡ менән ойотолған. Был ризыҡ, нигеҙҙә, Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында киң таралған.

**Әжекәй** - әҙер ҡатыҡҡа һөт өҫтәлеп, ул ҡороғансы ҡайнатыла; барлыҡҡа килгән һары массаны сәй табынына бирер алдынан уға яңы һауылған һөт ҡушыла. Йәйгеһен уны ҡышҡылыҡҡа әҙерләп ҡуйғандар.

**Һөҙмә** - шулай уҡ сәй табынына ултыртылған ризыҡ. Яңы ғына һығып алынған, бал ҡушып болғанған эремсек.

# ХӘРБИ ХАЛЫҠТЫҢ данлы тарихы

**"Ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай", ти халыҡ мәҡәле. Һуңғы йылдарҙа молекуляр биология, генетика фәндәре өлкәһендә яһалған асыштар был мәҡәлдең хаҡлығын тағы ла бер ҡат раҫланы. Әлеге ваҡытта гаплатөркөмдәр буйынса донъя халыҡтарының, шул иҫәптән башҡорт милләтенең генетик маркерҙары билдәләнә. Ошо хаҡта һәм халҡыбыҙ тарихына бәйле башҡа мәсьәләләр тураһында тарих фәндәре кандидаттары- БР Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының этнология бүлеге мөдире Юлдаш ЙОСОПОВ менән Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, киң билдәле "Тарихи мөхит" телетапшырыуҙар циклын алып барыусы журналист Салауат ХӘМИҘУЛЛИН фекер алыша.**

**▸ Ғалимдарҙың гаплатөркөмдө билдәләү буйынса яһаған асыштары халҡыбыҙ тарихын өйрәнеүгә өр-яңы күҙлектән ҡарауға, яңы методологияны барлыҡҡа килтереүгә мөмкинлек бирһә лә, ниндәйҙер үҙгәрештәр күҙәтелмәне лә тиерлек. Беҙ, нисектер, һаман да "атом дәүерендә лә ат кәрәк", тип йәшәйбеҙ кеүек. Әле "Башҡорт халыҡ тарихы"-ның күптомлығы баҫыла һәм был асыш халҡыбыҙ тарихын тағы ла боронғораҡ замандан башлап өйрәнеп, яңынан тулыландырыуҙы ла талап итә. Шулай түгелме?**

**Ю. Йосопов:** Эйе, сөнки башҡорт милләтенең этногенез мәсьәләһе һәр ваҡыт фән өсөн хәл ителмәгән оло һәм ҡатмарлы проблема булып торҙо һәм шулай булып ҡала. Был мәсьәлә бер ни тиклем сәйәсиләштерелгән, уның тирәһендә бихисап риүәйәттәр йөрөй. Шуға күрә, башҡорт этногенезы менән шөғөлләнеүсе һәр кем ниндәйҙер көтөлмәгән ҡаршылыҡтарға, уңайһыҙлыҡтарға барып юлыға. Археология өлкәһендә булһынмы, топонимияламы, популяция генетикаһындамы, һәр ваҡыт ниндәйҙер килешмәүсәнлек хәле килеп тыуа. Тарихи сығанаҡ булараҡ молекуляр биологияға килгәндә, уның сифатлы яңы сығанаҡ икәнлегенә берәү ҙә шикләнмәй. Археологияға, топонимияға, фольклорға ҡарағанда, биология күрһәткестәре аныҡыраҡ, теүәлерәк. Шул уҡ ваҡытта молекуляр биология анализдарын да кешеләр эшләй, шуға күрә ул өлкәлә ебәрелгән хаталар фәҡәт кеше факторына бәйле булыуы ихтимал. Мин үҙебеҙҙә анализдар алыуҙа һәм Мәскәүҙә уларҙы тикшереүҙә лә ҡатнашам. Шуға күрә ҡайһы урында хата китеү ихтималлығын да беләм. Беҙ былтыр төрлө ырыуҙарға бүлеү принцибы буйынса барлығы 800 ҡан өлгөһө йыйып алдыҡ. Тикшереүҙә 19 административ райондан 17 ырыу ҡатнашты. Ошо юл менән бөгөн беҙ башҡорт этногенезы мәсьәләһенә асҡыс булырлыҡ дәлилдәр таптыҡ. Материалды алдағы йылдарҙа баҫып сығарып, халыҡҡа еткерергә иҫәп тотабыҙ. Әлеге мәлдә беҙ өҫтәмә анализдар алып, үҙебеҙгә кәрәкле материалдар туплап, ғилми хеҙмәтте тулыландырыу эше менән мәшғүлбеҙ.

Эйе, был ғилми эшкә ышанып етмәүселәр ҙә бар. Дөрөҫөн әйткәндә, башта мин үҙем дә уға ышанып бөтмәгәйнем. Әммә тарихсыларҙың молекуляр биологияға сәйер мөнәсәбәте хөкөм һөрөүгә ҡарамаҫтан, был анализ күрһәткестәре барыбер ҙә фәндә үҙенең лайыҡлы урынын аласаҡ һәм улар башҡорт милләте этногенезын өйрәнеүҙә этәргес көс булып торасаҡ.

**▸ Был осраҡта төрлө йүнәлештә эшләүсе тарихсыларыбыҙҙың ошоға тиклем үткәргән тикшеренеүҙәренең барыһы ла раҫланасаҡ, тип уйлайһығыҙмы, әллә хаталар ҙа табыласаҡмы?**

**Ю. Йосопов:** Молекуляр биология анализдары һөҙөмтәләре, минеңсә, күп ғилми ҡараштарҙы раҫлаясаҡ, кире ҡаҡҡыһыҙ итеп фәндә нығытасаҡ. Шул уҡ ваҡытта был йүнәлеш төрлө концепцияларға уртаҡ һыҙаттарҙы ла билдәләйәсәк. Беҙ әлегәсә ике төп концепцияны беләинек, улар: Руденко менән Мәжитов һәм Кузеев концепциялары. Әлбиттә, бында урталыҡта тороусы теориялар ҙа бар, әммә улар тәүгеләренән әллә ни айырылмай тиерлек. Ә ДНК анализдары тәүге ике төп концепцияларын ҡайһы бер урындарҙа яраштырыуы ла ихтимал. Шул уҡ ваҡытта өсөнсө төрлө һығымта яһалыуы ла бар.



*Беҙ былтыр төрлө ырыуҙарға бүлеү принцибы буйынса барлығы 800 ҡан өлгөһө йыйып алдыҡ. Тикшереүҙә 19 административ райондан 17 ырыу ҡатнашты. Ошо юл менән бөгөн беҙ башҡорт этногенезы мәсьәләһенә асҡыс булырлыҡ дәлилдәр таптыҡ. Материалды алдағы йылдарҙа баҫып сығарып, халыҡҡа еткерергә иҫәп тотабыҙ. Әлеге мәлдә беҙ өҫтәмә анализдар алып, үҙебеҙгә кәрәкле материалдар туплап, ғилми хеҙмәтте тулыландырыу эше менән мәшғүлбеҙ.*

**▸ Ә ниңә молекуляр биология үҙе айырым концепция булып сығыш яһай алмай һуң?**

**Ю. Йосопов:** Был да мөмкин. Тик яңы концепцияны барлыҡҡа килтереү өсөн мәсьәләгә комплекслы ҡараш талап ителә.

**▸ Шулай ҙа, әйтәйек, топонимияны, фольклорҙы өйрәнеүсе ғалимдар хаталаныуы бар, ә ҡан анализдары менән эш итеүсе молекуляр биологияла хаталар бөтөнләй булмаҫҡа тейеш, тип уйланыла. Шулаймы?**

**Ю. Йосопов:** Килешәм, тик шул уҡ ҡан анализдарына ниндәй күҙлектән сығып аңлатма бирәһең бит әле. Был да бик мөһим мәсьәлә. Сөнки гаплатөркөмдәрҙең йәшен билдәләгәндә ғалимдар бер мең йылға тиклем хаталаныуы бар.

**▸ Ә бына беҙҙең Салауат дуҫыбыҙ "Урал палеолиты йомағы" тигән телевизион фильмында, мәҫәлән, биологтар яһаған асышты үҙенсә бик ҡыҙыҡлы итеп аңлата алған. Минеңсә, уның аңлатмалары бик үҙенсәлекле һәм ышандырғыс килеп сыҡҡан. Салауат, ниндәй маҡсат менән төшөргәйнең был фильмды?**

**С. Хәмиҙуллин:** Тапшырыуҙа *R1b* гаплатөркөмө тупланған ике массив хаҡында һүҙ барғайны. Европала был массивҡа Испанияның төньяғы, Франция һәм Бөйөк Британия утрауҙары ҡарай. Ә Евразияның икенсе яғында тик Көньяҡ Урал ғына был массивты тәшкил итә. Мин тапшырыуҙа ошо хаҡта һүҙ алып барып, бының осраҡлы күренеш булмауын һыҙыҡ өҫтөнә алдым. Шул уҡ ваҡытта Францияла ғы һәм Көньяҡ Уралдағы мәмерйә живописының бер үк ваҡытта барлыҡҡа килеүе лә осраҡлы түгел. Европаның Альтамир, Ласка, Шаве мәмерйәләрендәге һүрәттәр менән Көньяҡ Урал мәмерйәләрендәге һүрәттәр бер-береһенә тап килә. Бындай мәҙәниәттәр бер-береһенән айырым рәүештә барлыҡҡа килеүе бөтөнләй мөмкин түгел. Ә ни өсөн башҡа бер урында ла бер үк төрлө һүрәттәрҙе төшөрмәгәндәр һуң? Мин фильмда ошо һорауҙарға яуап эҙләйем дә инде. Ошо урында молекуляр биология менән шөғөлләнеүсе ғалимдарҙың һуңғы асышы күп кенә серҙәрҙе сисергә асҡыс булды ла инде. Йәғни Европала шул мәмерйәләр тирәһендә йәшәүселәр ҙә, элек-электән Шүлгән мәмерйәһе урынлашҡан төбәктә йәшәүсе бөрйән ырыуы башҡорттары ла *R1b* гаплатөркөмөнә ҡарай. Был да осраҡлы күренеш түгел. Ул замандан бирле күпме һыуҙар аҡҡан, ниндәй генә күсенеүҙәр булмаған, телдәр, диндәр алмашынған, әммә башҡорттарҙың таш быуат заманынан алып ошо төбәктә йәшәүен берәү ҙә инҡар итә алмай.

**Ю. Йосопов:** Ундай һығымталар яһарға иртәрәк түгелме икән? Әйтәйек, тегендә һәм бындағы мәмерйәләрҙәге һүрттәрҙең ҡасан барлыҡҡа килеүе хаҡында аныҡ ҡына мәғлүмәттәр бармы һуң?

**С. Хәмиҙуллин:** Котов беҙҙең мәмерйәләрҙәге һүрәттәрҙе ун һигеҙ мең йыл элек төшөрөлгән тип иҫәпләй. Ә Европалағы мәмерйә һүрәттәре беҙҙәгенән бер-ике мең йыл элек барлыҡҡа килгән. Мең йыллыҡ мөҙҙәт таш быуаты өсөн критик иҫәпләнмәй, минеңсә. Бындай арауыҡтар мамонтҡа һунар итеүселәр өсөн әллә ни ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырмағандыр, тием. Әгәр ҙә Көньяҡ Американы тәүләп яулаусы индейҙарҙың ҙур ара үтеп, Алтайҙан икенсе ҡитғаға барып сығыуын күҙ алдына килтереп ҡараһаҡ, Франция менән Урал араһы әллә ни ҙур ҙа түгел. Мин был фильмда ошо логик сылбырҙы тоташтырырға тырыштым да инде.

**Ю. Йосопов:** Был концепция фәндә урын алһын өсөн уны иң тәүҙә ғилми яҡтан иҫбатларға кәрәк. Фәндә иң ҙур проблема ул - методология. Мәҫәлән, археология этносты, уның телен билдәләй алмай. Әйтәйек, беҙ баш һөйәгенә ҡарап ҡына ул кешенең ниндәй телдә һөйләшкәне хаҡында әйтә алмайбыҙ. Методологияны билдәләгәндә беҙ элек ниндәй миграция процестары барғанлығы хаҡында ла белергә тейешбеҙ. Шул уҡ таш быуатында үҙенә хас миграция күҙәтелгән. Әйтәйек, көнбайыштан көнсығышҡа күсенеү. Бронза быуаты аҙағында инде көнбайыш Себер көнбайышҡа табан күсенә башлай. Тимер быуатының башына ниндәй күсенеүҙәр хас? Әгәр ҙә ошо рәүешле беҙ ниндәй гаплатөркөмдөң ҡайһы быуатта ҡайҙан ҡайҙа күсенеүен билдәләһәк кенә ниндәйҙер һығымталар яһай алабыҙ. Европалағы һәм Көньяҡ Уралдағы мәмерйәләр янында йәшәүселәрҙең уртаҡлығын билдәләү өсөн дә оло методологик хеҙмәт талап ителә. Бер төрлө гаплатөркөм хаҡындағы мәғлүмәт кенә ғилми һығымта яһарға тулы нигеҙ була алмай әлегә.

**▸ Юлдаш, бына һеҙ үткәргән ғилми тикшеренеүҙәргә таянып, R1b гаплатөркөмөнә ҡараған бөрйәндәрҙең башҡорт милләтенең барлыҡҡа килеүендә ниндәй роль уйнауы хаҡында ниндәйҙер һығымталар яһарға буламы?**

**Ю. Йосопов:** *А*, *Б* гаплатөркөмөнә ҡараусылар, мәҫәлән, Африкала, *Е*-лар Алғы Азияла йәшәй. Хәҙерге ваҡытта гаплатиптарҙың меридиан селтәре төҙөлә. Унда тарихи датаны билдәләүҙә 500-ҙән алып бер мең йылға тиклем ваҡыт айырмаһына юл ҡуйыла. Был осраҡта бер үк төрлө ике гаплатип бер-береһенә шул тиклем яҡын килеүе йә алыҫлашыуы ихтимал. Әйтәйек, беҙ ирландтарҙың һәм бөрйән ырыуы башҡорттарының гаплатиптарын алһаҡ, уларҙың ҡасан һәм ҡайҙа бергә йәшәүен билдәләү мөмкин буласаҡ. Беҙ тик ошонан һуң ғына Салауаттың фараздарының хаҡлы булыуын иҫбат итәсәкбеҙ. Бөрйәндәрҙең башҡорт милләтенең барлыҡҡа килеүендәге ролен дә ошонан һуң билдәләп була, әлбиттә. Был тик бер йылда ғына башҡара торған эш түгел, бының өсөн тотош институттың йылдар һуҙымында комплекслы ғилми эшмәкәрлеге талап ителә.

Гаплатөркөмдәрҙе өйрәнеү буйынса эшмәкәрлек этногенез мәсьәләһен хәл итмәй, ә миграция, йәғни ырыу-ҡәбиләләрҙең, халыҡтарҙың бер урындан икенсе урынға күсенеүен өйрәнеүгә булышлыҡ итә. Гаплатөркөм кешенең ҡайҙан килеүен һәм үҙенә яҡын торған башҡа гаплатөркөмдәрҙе күрһәтә. Тикшереүсе ғалим иһә, ошо мәғлүмәткә ҡарап, теге йәки был халыҡтың нисек барлыҡҡа килеүен үҙе өйрәнеп билдәләй.

**С. Хәмиҙуллин:** Бына мин үҙем, мәҫәлән, *И2* гаплатөркөмөнә ҡарайым, минең төркөмгә ҡараусылар Балҡанда йәшәүсе хорваттар. Әммә үҙем рухым буйынса башҡортмон. Милләт - ул кешенең үҙ-үҙенә бирелгән баһаһы.

**Ю. Йосопов:** Бына һин, Салауат, бөрйәндәргә фәндә ниңә шул тиклем иғтибар бар тип уйлайһың?

**С. Хәмиҙуллин:** Был уларҙың боронғолоғонан килә. Бөрйәндәрҙән тыш, тамъяндар, ғәйнәләр шул уҡ *R1b* гаплатөркөмөнә ҡарай. Әле мин бөрйәндәр хаҡында китап тамамланым, яҡын арала шул китапты баҫтырып сығарырға иҫәп тотам. Бөрйәндәргә килгәндә, ғәрәп тарихсылары уларҙы айырым халыҡ итеп телгә ала. Тарихсылар ғәрәптәр телгә алған бөрйәндәр менән хәҙерге бөрйәндәрҙең икеһе бер халыҡ булыуына шик белдерә. Ә бына Морат Рәмзи, Әхмәтзәки Вәлиди кеүек ғалимдар уларҙы бер бөтөн

**✓ Әгәр ҙә батыр ҡартаталарым була тороп, үҙ милләтемдән баш тартам икән, мин уларҙы һатам булып сыға. Улар башҡорт идеалдары өсөн көрәшкән. Ул идеалдар ябай ғына: был ер беҙҙеке һәм беҙ уны башҡа берәүгә лә бирмәйәсәкбеҙ.**



итеп ҡарай. Мин өйрәнгән сығанаҡтарҙа ла беҙҙең бөрйәндәр менән Кавказдың төньяғында йәшәүсе бөрйәндәрҙең бер бөтөн булыуы асыҡ күренә. Тик ниңә улар иран сығышлы булһа, гаплатөркөмдәре *R1b*-ға ҡарай һуң? Ә ирандарҙа бындай ҡан төркөмө юҡ. Әгәр ҙә археологик объекттарҙан гаплатөркөмгә анализдар алғанда, бәлки, күп нәмә асыҡланыр ине. Мәҫәлән Турбаслы мәҙәниәте төньяҡ Кавказдан килгән бөрйәндәр менән бәйле.

**▸ Башҡорт этногенезы мәсьәләһен билдәләүҙә ырыуҙарҙың күплеге лә буталсыҡлыҡ тыуҙыра, тигән фекергә урын булыуы бармы? Икенсенән, халҡыбыҙҙың мең йыл ярымлыҡ төрки осорона тиклем башҡа осорҙары ла булған бит әле. Бәлки, беҙгә бөтөнләй икенсе төрлө, яңыса фекерләү форматына күсеү фарыздыр. Беҙ бик оҙаҡ ваҡыт бер урында тапанабыҙ түгелме, егеттәр?**

**С. Хәмиҙуллин:** Бәлки, ул фекер форматы әллә ни яңы ла булмаҫ, әммә дәлилдәр кире ҡаҡҡыһыҙ аныҡ һәм дөрөҫ булырына

# ҒЫНА...

## була

ышаныс бар. Бөгөн беҙ донъяның барлыҡ урынында үҙебеҙ хаҡында һаҡланған мәғлүмәттәрҙе өйрәнә алабыҙ.

**Ю. Йосопов:** Ҡайһы халыҡтың ырыуы юҡ, уға үҙ тарихын яҙыу ҙа еңелгә төшә. Сөнки уларҙа фольклор ҡатламы, этнонимия төрлөлөгө булмай. Улар бары тик яланғас археологияға, административ райондарға бәйле гаплатиптарға ғына мөрәжәғәт итә. Унда бик анһат ҡына һығымталар яһарға була. Булат Аҙнабаевтың бер фекере миңә бик оҡшағайны. "Тик хәрби халыҡтың ғына тарихы була", тип әйткәйне ул бер мәл. Бик тәрән мәғәнәле һүҙҙәр. Ысынлап та, көнө буйы, йылдар буйы, быуат буйы һабан һөрөп, мал көтөп кенә йәшәгән халыҡҡа үҙ тарихын белеүҙең ихтыяжы ла юҡ. Ә хәрби халыҡҡа иһә, яугир рухын һүндермәй һаҡлар өсөн дә үҙ тарихын белеү фарыз. Халыҡ - ул сәйәсәт субъекты, ә ниндәйҙер кешеләр төркөмө фәҡәт ашау-эсеү өсөн генә йәшәй икән, ул бары төркөм генә. Алтын Урҙала теге йәки был батырҙың, яугирҙең исеме һәр ваҡыт ырыуының исеме менән ҡуша аталып йөрөтөлгән. Башҡорттарҙы ла ырыу кланы системаһы тарих аренаһына алып килгән. Сөнки һәр бер ырыуҙың башҡорт милләте ҡорона ҡушылғанға тиклем үҙ тарихы булған һәм бар. Ул тарих донъяла йәшәгән бер халыҡтың йә дәүләттең тарихына барып ялғана. Башҡорт этногенезының барлыҡ күркәмлеге лә ошо факторға барып ялғана. Башҡорт ырыуҙарының гаплатөркөмдәрен өйрәнә башлағанда күптәр уның бындай һөҙөмтәләргә алып килеүен көтмәгәйне, йәғни гаплатөркөмдәр беҙҙең милләттә ырыуҙар бүленеше менән тура килә. Был күренеш шул турала һөйләй: беҙ меңәр йылдар һуҙымында ошо ерҙә йәшәп тә, берберебеҙ менән буталып бөтмәгәнбеҙ, һәр ырыу үҙенең гаплатөркөмгә бәйле үҙенсәлеген дә һаҡлап ҡала алған. Мәҫәлән, бөрйәндәр менән ҡыпсаҡтар икеһе ике сығанаҡлы, ике төрлө тарихлы ырыуҙар. Баймаҡ районының Темәс ауылында бер өйҙә ҡыпсаҡтар, икенсеһендә бөрйәндәр йәшәй. Уларҙың гаплатөркөмдәрен тикшерә башлаһаң, тамырҙары шундуҡ меңәр саҡрымдарға айырыла. Көнбайыш Башҡортостанда иһә хатта яҡын туғандарҙың гаплатөркөмдәре төрлөсә.

**▸ Ә көнбайыш Башҡортостанда Ҡаҙан йоғонтоһона бирелеп, ассимиляцияға дусар ителгәндәр менән эштәр нисек тора?**

**Ю. Йосопов:** Беҙ был төбәктә эшләгәндә тарихи хәҡиҡәткә иң яҡыны һаналған XIX быуат аҙағы, XX быуат башы тарихи мәғлүмәттәрен нигеҙ итеп алабыҙ. Әйтәйек, бер ауыл кешеләре хәҙерге ваҡытта үҙҙәрен татарға һанай, ә беҙ үткән быуат мәғлүмәттәренә таянып, ауыл халҡының 80 проценты башҡорттар булыуын беләбеҙ. Ә гаплатөркөмдәр анализдары иһә, кемдең башҡорт булыуын, кемдең ситтән килгәнлеген асыҡ күрһәтә. Биохимия һәм генетика институты Татарстандың көнсығышында тикшереүҙәр үткәрҙе. Уларҙың тикшеренеүҙәре буйынса был республиканың көнсығышында, асылда, башҡорттар, ә көньяҡ-көнбайышында мосолман сыуаштар, мишәрҙәр йәшәүе асыҡланды.

Этностар нисек барлыҡҡа килә һуң? Совет осоронда милләттәргә бүлеү тел үҙенсәлегенә ҡарап башҡарылды. Кемдәр үҙ телмәрендә "*ҙ*", "*ҫ*", "*һ*" өндәре ҡулланды, улар - башҡорт, ә ҡалғандары татар тип атала башланы. Ә уға тиклем милләттәргә бүлеү шәжәрәгә ҡарап билдәләнгән һәм ул принцип иң дөрөҫө һанала.

**С. Хәмиҙуллин:** Татар этносын формалаштырыуҙа сыуаштар ҙур роль уйнай. Сыуаштарҙың мосолман динен ҡабул иткәндәре һуңынан үҙҙәрен татар тип таный башлай. Служивый татарҙар ҙа башта үҙҙәрен татар тип танымай, был этноним уларға урыҫтарҙың үҙҙәрен шулай тип атауы аша бирелә. Тарихҡа объектив ҡараған татар ғалимдары был хаҡта йәшермәй яҙа.

**Ю. Йосопов:** Татарҙар - улар Рәсәй төрөктәренең адаптацияланған варианты.

**▸ Евразияла һәр дәүер һайын яңы империя хакимлыҡ иткән. Империялар барлыҡҡа килгән һымаҡ, уларҙың эңере лә була. Алдағы дәүерҙә сират кемгә етер тип уйлайһығыҙ?**

**С. Хәмиҙуллин:** Әлбиттә, Рәсәй ҡаласаҡ. Беҙгә, башҡорттарға, был насар вариант түгел.

**Ю. Йосопов:** Рәсәйҙең дәүләт булараҡ тарҡалыу ҡурҡынысы уҙған быуаттың 90-сы йылдарында күҙәтелде. Хәҙер ундай ҡурҡыныс мәл үтте. Беҙгә, башҡорттарға, хәҙерге заман шарттарын ҡабул итеп, технологияларын үҙләштереп, яңы быуаттың тарих субъектына әүерелеү фарыз.

**▸ Һуңғы ваҡыт модернизация тигән төшөнсә модаға әүерелеп бара. Милләтте модернизациялауҙы һеҙ нисек аңлата алаһығыҙ?**

**С. Хәмиҙуллин:** Әгәр ҙә милләт заман талаптарына яуап бирһә, уның киләсәге бар. Икенсе шарт, беҙҙең балаларҙың башҡорт мәҙәниәтен үҙендә һаҡлай һәм артабан беҙҙең ейәндәргә тапшыра алыуы. Ошо шарттар үтәлгән осраҡта цивилизация милләтте юҡҡа сығара алмай. Мәҫәлән, әрмәндәр ниндәй генә хәлдәр булған осраҡта ла һәр ваҡыт әрмән булып ҡала.

**Ю. Йосопов:** Башҡорт кешеһенең, үҙенең тарихи тамырҙарына таянып, хәҙерге заманда үҙенең урынын тойоуы мөһим. Улай ғына ла түгел, башҡорт милләтенең нигеҙе - үҙендең атай-олатайҙарынды таныу һәм һанлау.

**С. Хәмиҙуллин:** Тарихтың да төрлөһө була, беҙгә халҡыбыҙҙың үткәне менән ғорурланырлыҡ тарихты белеү фарыз. Әгәр ҙә кеше үҙенең үткәненә ҡарап ғорурланмай икән, уның киләсәге ҡараңғы. Ә беҙҙең ғорурланырлыҡ тарихыбыҙ бар. Барлыҡ халыҡтарҙың да ундай тарихы юҡ. Иң мөһиме - героик тарихыбыҙ бар беҙҙең.

**▸ Милләтебеҙҙең ырыуҙар феномены ла үҙ баһаһын алмаған. Үткән быуатта был күренеште хатта трайбализм тип атаусылар ҙа табылды.**

**Ю. Йосопов:** 90-сы йылдар милли тойғоларҙың ҡайнап торған мәле ине. Шуға күрә ырыуыңды белергә ынтылышты трайбализм тип атау ҙа тик шул заманға ғына хас күренеш булды. Хәҙер беҙ шуны аңлайбыҙ: мәғлүмәт һәм технология быуатында үткәнгә, йәғни милләттең ырыу ҡоролошо менән йәшәүгә кире ҡайтыу ҡурҡынысы бөтөнләй юҡ.

**С. Хәмиҙуллин:** Дағстанда, мәҫәлән, трайбализмдың тормошҡа ашыуына ышанып була. Беҙҙә, киреһенсә, үҙ ырыуыңды, сығышыңды, тамырҙарыңды белеү өсөн кәрәк булды ырыуҙар хәрәкәте. Хәҙер ырыуыңды белеү үҙ милли асылыңды өйрәнеүгә, таныуға, белеүгә йүнәлеш биреүсе бик мөһим фактор булып тора. Көнбайыш Башҡортостанда йәшәүселәр ҙә бер хәҡиҡәтте яҡшы аңлап алды: кемдең ырыуы бар, ул - башҡорт, ә кемдеке юҡ - ул татар милләтенә ҡарай. Ырыуыңды таныу бөгөн милләтеңде таныуҙы нығытыусы фактор, тарихыңды өйрәнеүгә сәбәп булып тора. Мәҫәлән, Краснокама районында йәшәүселәр үҙҙәренең кирәй ырыуы вәкиле икәнлеген танығандан һуң, милләт мәсьәләһенә мөнәсәбәттәрен ҡырҡа үҙгәртте.

**▸ Хәҙерге ваҡытта донъяла, шул иҫәптән Рәсәйҙә ислам дине факторы көсәйә бара. Был хәл беҙҙең халыҡ тормошонда ниндәй сағылыш табыр тип уйлайһығыҙ?**

**С. Хәмиҙуллин:** Был ҡотолғоһоҙ процесс. Тарихи юҫыҡтан ҡарағанда, ислам дине беҙҙе йотолоуҙан һаҡлап ҡалған. Шуға күрә лә беҙ диндең милләтебеҙ өсөн ниндәй роль уйнағанын бик яҡшы аңлайбыҙ. Милләт өсөн динһеҙ юл - ул билдәһеҙлеккә табан юл.

**▸ Ә бына дингә килеүсе ҡайһы берәүҙәрҙең үҙ милләтенән китеүенә, ситләшеүенә нисек ҡарайһығыҙ? Ундайҙар кемгә кейәүгә сыҡһаң да, кемгә өйләнһәң дә була, мосолман булһа, еткән, тигән ҡараштә. Статистика буйынса ҡатнаш никахтар нисбәте 10 проценттан артҡан милләт яйлап кәмеүгә, башҡалар араһында иреп юҡҡа сығыуға дусар...**



*Хәҙер ырыуыңды белеү үҙ милли асылыңды өйрәнеүгә, таныуға, белеүгә йүнәлеш биреүсе бик мөһим фактор булып тора. Көнбайыш Башҡортостанда йәшәүселәр ҙә бер хәҡиҡәтте яҡшы аңлап алды: кемдең ырыуы бар, ул - башҡорт, ә кемдеке юҡ - ул татар милләтенә ҡарай. Ырыуыңды таныу бөгөн милләтеңде таныуҙы нығытыусы фактор, тарихыңды өйрәнеүгә сәбәп булып тора. Мәҫәлән, Краснокама районында йәшәүселәр үҙҙәренең кирәй ырыуы вәкиле икәнлеген танығандан һуң, милләт мәсьәләһенә мөнәсәбәттәрен ҡырҡа үҙгәртте.*

**С. Хәмиҙуллин:** Ундайҙар бар, беләм. Тик беҙ мосолман булған өсөн генә үҙ милләтебеҙҙән баш тартырға тейешбеҙме ни? Дингә килеү татар телендә һөйләшә башлау, тип уйлаусы наҙандар ҙа бар. Бер ҡасан да, бер тел дә, шул иҫәптән татар теле лә дин теле булғаны юҡ. Дин теле берәү генә - ул ғәрәп теле. Бары тик Ҡөрьәнде тәфсирләү генә һәр кемдең үҙ телендә башҡарыла. Ҡөрьәндә лә Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе берберեһен танып белһен өсөн төрлө халыҡ итеп яралтыуы хаҡында белдерә. Тимәк, кешеләрҙең милли принцип буйынса бүленеше Ҡөрьән тарафынан тыйылмай, рөхсәт ителә. Беҙгә Аллаһы Тәғәлә ошо ерҙе биргән һәм беҙ үҙ тыуған еребеҙҙә йәшәйбеҙ. Әгәр ҙә беҙ башкорт булыуҙан туҡтаһаҡ, был ер ҙә Башҡортостан тип аталмаясаҡ. Тимәк, беҙгә Аллаһы Тәғәлә был ерҙе башҡортлоҡ асылыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу шарты менән биргән, шуға күрә үҙ асылыбыҙҙы һаҡлай алмауыбыҙ Хаҡ Тәғәлә алдында хыянатҡа тиңләнәсәк. Бына ошо хәҡиҡәтте аңлар өсөн булһа ла беҙгә ислам дине кәрәк. Ҡайһы берәүҙәр үҙҙәрен милләтсе тип атамаһындар өсөн үҙ милләтенән баш тартып маташа икән, был иң оло ахмаҡлыҡ һаналыр ине. Бөгөн донъяла урыҫтарҙың үҙҙәренән дә нығыраҡ урыҫ булған йәһүдтәр бар. Быларҙы мин мосолман булғандан һуң интернационал булып киткән башҡорттарға төбәп әйтәм. Ислам этник һыҙатты тыймай, уны юҡҡа сығармай. Мин әгәр ҙә батыр ҡартаталарым була тороп, үҙ милләтемдән баш тартам икән, мин бит иң беренсе нәүбәттә уларҙы һатам булып сыға. Улар башҡорт идеалдары өсөн көрәшкән. Ул идеалдар ябай ғына: бына был ер беҙҙеке һәм беҙ уны башҡа берәүгә лә бирмәйәсәкбеҙ.

Әгәр ҙә ислам диненә килгән башҡорт үҙ милләтенән ситләшә икән, ул наҙан, үҙ тарихын белмәүсе, атай-олатайҙарынан баш тартыусы кеше. Быға мин башҡа төрлө аңлатма бирә алмайым.

Ожмахҡа эләгеү-эләкмәү күҙлегенән сығып ҡарағанда, милли сығыш бында нигеҙ була алмай кеүек. Әммә үҙенең асылын, йөҙөн юғалтҡан кешене теге донъяла танырҙармы һуң? Танығыһыҙ рәүешкә килгәнде ожмах ҡабул итерме? Юҡ, әлбиттә.

**Ю. Йосопов:** Беҙҙә генә түгел, Кавказда ла күҙәтелә дингә килеүселәрҙең үҙ милләтенән ситләшеүе. Тарихи күҙлектән ҡарағанда, башҡорттар ислам һағында тороусы берҙән-бер халыҡ булған. Тик бөгөн нишләптер был хаҡта оноталар. Әлбиттә, мәғрифәтселәр хаҡында һөйләйҙәр, әммә башҡорт ихтилалдары юлбашсылары менән йәнәш тороусы абыҙдар, уларҙың донъяға, дингә, халыҡҡа ҡарашы хаҡында һөйләүсе юҡ кимәлендә. Ә бит улар ислам динен һаҡлауҙы үҙ ерен һаҡлау менән бер үк бурыс итеп ҡуйып көрәшкә барған. Беҙҙең ғалимдарға тиҙ арала башҡорт исламы концепцияһын булдырыу, уның архитибын формалаштырыу фарыз. Әлбиттә, хәҙер ислам дине эсендә төрлө ағымдар барлыҡҡа килде. Әммә ниндәй генә йүнәлештәр булмаһын, башҡорт кешеһе бер үк ваҡытта динле лә, милли рухлы ла булырға тейеш. Башҡорт мосолманының үҙ архитибы, менталь сифаты булыуы мотлаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Фән үҫеше тарихыбыҙға өр-яңы күҙлектән ҡарап, хаҡ баһа бирергә мөмкинлек биргән заманда йәшәйбеҙ. Донъяла һүҙҙәр ҙә аҙаша, күҙҙәр ҙә ҡамаша, тойғолар ҙа яңылыша, аңдар ҙа аймылыша, бары тик ҡан ғына меңәр йылдар уҙһа ла, үҙгәрешһеҙ ҡала килә. Ҡанға һеңгәнде йыуып та, юнып та бөтөрөп булмай шул. Нисәмә мең йылдар уҙһа ла, милли рухыбыҙҙың һүнмәй балҡып йәшәүе шул турала һөйләй.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Бисә-сәсәләрҙән кеме генә Заһиҙәнең тирмәһенә инмәһен, ирҙәр күлдәге тегеп ултырыуын күреп, ҡыуанып китә. - Туй бүләктәре әҙерләй, - тип шым ғына һөйләшеп алалар, - кейәү һайлаған, тигән һүҙҙәр дөрөҫ икән.*



**Рус яҙыусыһы Филипп Диомидович Нефедов 1838 йылда Иванов-Вознесенск ҡалаһында крепостнойҙар ғаиләһендә донъяға килә. Тыуған ауылында училище тамамлай, шул йылдарҙа уҡ проза менән ҡыҙыҡһына башлай. Ф. Д. Нефедов артабанғы уҡыуын Мәскәү университетының тарих-филология факультетында дауам итә. Мәскәүҙең алдынғы баҫмаларында уның рус крәҫтиәндәренең ауыр тормошон һүрәтләгән "Безоброчный", "Крестьянское горе", "Иван-воин" һәм башҡа әҫәрҙәре нәшер ителә. Ул байтаҡ йылдар "Русский курьер" гәзитендә эшләй, әҙәбиәт һәм публицистика менән шөғөлләнә, либераль ҡараштары арҡаһында эҙәрлекләүҙәргә лә дусар була. Яҙыусы шулай уҡ этнография, археология һәм антропология менән ныҡлап мауыға, Рәсәй буйлап оҙайлы сәйәхәт ҡыла. Башҡортостан ерҙәрендә йөрөгәндә ул башҡорттарҙан бик күп легендалар, йырҙар һәм әкиәттәр яҙып ала. Тәү сиратта яҙыусының иғтибарын, әлбиттә, Салауат батыр образы йәлеп итә. Башҡорт халҡының милли батырына һәм Крәҫтиәндәр һуғышына арналған "Движение среди башкир перед Пугачевским бунтом; Салават, башкирский батыр" тигән ғилми хеҙмәт яҙа. Әҙәби әҫәрҙәре лә байтаҡ уның. Ф. Д. Нефедов үҙе йәшәгән замандағы башҡорт йәмғиәтенең ҡатмарлы тормошо тураһында бәйән иткән "В горах и степях Башкирии", "На восточной окраине" тип исемләнгән хикәйәләр циклдары менән бер рәттән, иҫ китмәле ҡатын-ҡыҙ образдары тыуҙырған "Зигда", "Ушкуль" тигән хикәйәттәр ҙә ижад итә. Был әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгән көслө, ҡыйыу ҡатын-ҡыҙҙар, әлбиттә, һоҡланыу уята. Шулай итеп, Ф. Д. Нефедовтың башҡорт халыҡ легендаһына таянып ижад ителгән "Зигда", йәки башҡортса "Заһиҙә" хикәйәтенең тәржемәһен тәҡдим итәбеҙ.**




Шаян, теремек һәм ҡыйыу ине Заһиҙә. Бына иртә менән, тирә-яҡты яңғыратып, сылтырап көлгән тауыш ишетелә.

- Заһиҙә эшкә тотонған, - ти йәйләүҙәге халыҡ.

Киң далала, ҡороғон әҙер тотоп, ярһыу арғымаҡта йәш ҡатын елә...

- Заһиҙә өйөрөн ҡыуа, - ти башҡорттар, - йылҡыларының береһен ҡороҡларға ниәте.

Иртә яҙҙан башлап кистәрен йәйләүҙә ҡурай моңо ағыла, наҙлы ҡатын-ҡыҙ тауышы ишетелә.

- Заһиҙә ҡурай тарта, - тиҙәр, - бигерәк дәртле уйнай, ай-һай...

Аҡ тулҡынлы йылға үҙәнендә, тирмә янында, алһыу төҫтәге елән кейгән йәш ҡатын баҫып тора, башында мәрйенләп сигелгән зәңгәр ҡалпаҡ; алтын көмөш тәңкәләр тағылған ҡуйы ҡара толомдары тубығына еткән; ҡояш алһыулатҡан йөҙө йылмая, ҡуйы ҡаштары аҫтынан һирпеп кенә ҡуңыр күҙҙәр ҡарай. Ул йырлай ҙа, ҡурайҙа ла уйнап ебәрә. Йәш-елкенсәк Заһиҙәне уратып алған, үләнгә ҡарттар ултырышҡан, тирмәләренән алыҫ китмәйенсә, ҡатын-ҡыҙ ҙа йыр тыңлай.

*Тау баштарында ҡарағай,*
*Туғайҙарҙа бөҙрә тал.*
*Йәш саҡтарҙың ҡәҙерен белеп,*
*Бер туйғансы бейеп ҡал.*
*Ай, ҡыҙҙары, ҡыҙҙары ла,*
*Кемдә генә уйҙары.*
*Кемдә генә уйҙары ла,*
*Зифа икән буйҙары.*

- Ҡара әле, нимәгә өйрәтә ҡыҙҙарҙы, - ҡарттар үҙ-ара сөкөрләшә. - Дөрөҫөн әйтә бит, йәш саҡта күңел асмаһалар, тормош ҡорғас, ҡайҙа ул - бер-бер артлы балалар китә, кәйеф-сафа ҡайғыһы ҡалмай...

*Йәш ҡыҙҙарҙың бейегәнен*
*Ирҙәр ҡарап торалар,*
*Һоҡланыуҙарын йәшермәй,*
*Былай таҡмаҡ әйтәләр:*
*"Зифа буйлы, нәҙекәй билле*
*Ҡыҙҙар ҡайҙа китәләр,*
*Яман күҙле, уҫал телле*
*Бисәләр ҡайҙан киләләр?"*

Кемдер, түҙмәй, көлөп ебәрә.

- Ай, әсе тел, ҡалай төрттөрә бит әле ирҙәргә.

*Бүҙәнәнең балаһы ла*
*Төшкән икән тоҙаҡҡа.*
*Тоҙағыңды ҡыҙҙарға ҡор,*
*Һуҙма, егет, оҙаҡҡа, һай,*
*Һуҙма, егет, оҙаҡҡа.*

-Үҙенә берәйһен табып бирергә кәрәк, - тип көлөшә халыҡ. - Ултырмаһын әле яңғыҙ.

* * *

Заһиҙәгә ун туғыҙ йәш. Бына өс йыл инде кейәүгә сыҡҡанына, тик ире менән бер йыл ғына йәшәп ҡалды: Арыҫланы Бохараға бер өйөр йылҡы менән бер көтөү һарыҡ ҡыуып алып киткәйне, шунан бирле өнө-тыны юҡ. Бергә киткән дуҫтары әйләнеп ҡайтты, ә ул, исмаһам, бер хат-хәбәр ҙә ебәрмәй Заһиҙәгә.

- Үәт ахмаҡ, - тип аптырай халыҡ, - унда ни эшләп йөрөй икән? Ҡатынын ташлап...

- Йүнһеҙ, - тип ризалаша башҡалары. - Заһиҙәләй бисәне лә һанға һуҡмағас! Бәлә-ҡаза күрмәй генә йәшә лә ят уның һымаҡ ҡатын менән!

- Иҫәнме икән һуң? Нуғай-ҡаҙаҡ йәнен ҡыйманымы икән? Әллә Бохарала мал ҡыуып тик йөрөймө?

Заһиҙәне яусылата ла башланылар.

- Ҡайтмаҫ инде Арыҫланың, - тиҙәр. - Юлда ятып ҡалғандыр ул. Көтмә уны. Арабыҙҙан беребеҙҙе һайлап ал да ҡуй.

- Мин яңғыҙ түгел бит, - тип шаян яуап ҡайтара Заһиҙә. - Минең ирем бар.

- Кем һуң ул?

- Арыҫлан.

- Ул Бохарала ла инде! Иҫән булһа, ҡоллоҡталыр. Кем белә, бәлки, өйләнеп тә ҡуйғандыр.

- Юҡ, Арыҫлан башҡаны ҡатынлыҡҡа алмаясаҡ, мин дә башҡаны һөймәм, бына ҡайҙа ул Арыҫлан, - тип Заһиҙә йөрәгенә күрһәтә.

Береһенең дә Заһиҙәнең моңайғанын күргәне, көрһөнөүен ишеткәне юҡ: көлә, йырлай, эшен дә эшләй һәм гелән генә күңеле күтәренке.

- Ҡыҙыҡ бисә, - тиҙәр ауылда. - Ире юғалған, ә ул ҡайғырмай ҙа кеүек! Башҡаға ла күҙ атмай...

Бары тик тау-ҡаялар ғына белә Заһиҙәнең зарын:

*Уралтауҙың бейек түбәһендә*
*Үҫәлер ҙә шул яңғыҙ ҡарағас.*
*Вәғәҙәләр биреп, ниңә алдың,*
*Бергә ғүмер итер булмағас.*

Әммә тауҙар тыңлайҙар ҙа, өндәшмәй ҡалалар. Заһиҙә йырын тау шишмәләренә бағышлай:

*Ҡая араһынан атылып сыға*
*Шишмә лә генә түгел,*
*ағын һыу,*
*Төштәремә инеп үртәмә,*
*йәнем,*
*Күңелдәрем бигерәк болоҡһоу.*

Тау йылғаларының ярһыу тулҡындары гөрһөлдәп көлгәндәй була...

* * *

Өсөнсө яҙҙы ҡаршылай инде Заһиҙә ирһеҙ: йылғалар ҙа, тауҙар ҙа сәләмдәрен алып барып еткермәгәндәрҙер инде Арыҫланына.

Ауыл тағы йәйләүгә сыҡты.

Урмандарҙы, яландарҙы тотош бер балҡыш солғап алғандай булды, ҡар аҫтынан яңы ҡалҡып сыҡҡан сәскәләр йылмая, йылға-күлдәр ҡояш нурҙарында сағыла. Бейектә тау баштары яҙ кейеменә төрөнә. Үҙәндәрҙә, ағарып, тирмәләр күренә, ҡайҙа ҡарама - йөҙҙәр яҡтырған, тауыштар көр. Алыҫтараҡ көтөү, йылҡы өйөрҙәре... Уйна ла көл!

Заһиҙә кейәү егеттәрҙән ҡайҙа ҡасырға белмәй.

- Көтмә шул Арыҫланыңды, - ти йәш кенә егет, - онотҡан ул һине.

- Арыҫланың күптән юҡ инде, - ти икенсеһе,- булмаған кешене нисек көтәһең?

- Ышанма уларға, Заһиҙә,- ти ебәк бишмәт, ҡама бүрек кейгән олпат ир. - Тере ул. Күршеләрем Бохарала күреп ҡалған уны ике ҡатыны, балалары менән баҙарҙа. Йәштәргә ҡарама, Заһиҙә - йәш кешеләргә ышаныс юҡ. Ирҙе өлкәнерәк быуындан һайла: ундай ир ҡатынын ташлап сығып китмәҫ, ҡәҙерләп-иркәләп кенә йәшәр.

Заһиҙә уларҙы тыңлай-тыңлай ҙа, көлә.

- Әллә ысынлап та кейәү табайыммы икән? - ти ул. - Ҡабаланмағыҙ, уйларға форсат бирегеҙ. Унан ир һайлармын.

- Шәп итәһең! - кейәү егеттәр ҡыуанып китә. - Беҙ көтөрбөҙ. Тик оҙаҡҡа һуҙма инде.

Заһиҙә тирмәһенә инеп, уйға тала. Йөҙөндә, күҙҙәрендә һағыш. Йәш ҡатындың тол булып ултырыуы һәйбәт түгел: көтөүен кем көтөр ҙә, аттары юғалһа, кем эҙләр? Уныһы ярай ҙа ул: Заһиҙә, тырышһа, эшен алып барып сығарыр. Төндәрен ирһеҙ ҡалған йәш ҡатындарҙың ҡотон алып, ҡолаҡтарына ниҙер шыбырҙап йөрөгән шайтандан да ҡурҡмай ул, тик яңғыҙы йәшәгеһе килмәй Заһиҙәнең. Ул үҙенә ир табасаҡ.

Бисә-сәсәләрҙән кеме генә Заһиҙәнең тирмәһенә инмәһен, ирҙәр күлдәге тегеп ултырыуын күреп, ҡыуанып китә.

- Туй бүләктәре әҙерләй, - тип шым ғына һөйләшеп алалар, - кейәү һайлаған, тигән һүҙҙәр дөрөҫ икән.

Йәйләүҙә йөрөгән бар хәбәр - Заһиҙә тураһында.

- Кемде һайлаған икән?

Бер көн үтеп китә, икенсеһе, Заһиҙә күренмәй. Ҡолондары бәйҙән ысҡындырылған, бейәләр менән бергә дала ҡыҙыралар, ә донъяһын бер ҡарсыҡ көтә.

- Ҡыҙың ҡайҙа?

- Ҡунаҡҡа киткәйне.

Бер аҙна үтә, икенсеһе - һаман юҡ Заһиҙә. Кейәү егеттәрҙең береһе, оло ғына тол ир, Заһиҙә киткән ауылға юл ала. Барһа, Заһиҙә килмәне ул беҙгә, тиҙәр. Аптырашалар былар. Башҡа ауылдарға сапҡын ебәрәләр - береһе лә күрмәгән, береһе лә бер ни белмәй.

- Ауылығыҙҙан бер малай үтеп киткәйне, ә бисәләр күренмәне.

Юғалды Заһиҙә.

- Шайтан алып ҡасҡандыр инде, - тигән һығымтаға килә ауыл.

* * *

Тауҙар ҙа күптән артта ҡалды, башҡорт йәйләүҙәре лә күҙҙән юғалды. Тирә-яҡ - тотош дала, ҡайһы берҙә генә йылғалар осрап ҡуя. Юл буйлап еңел сәкмән, һарыҡ тиреһенән башлыҡ кейгән йәш кенә башҡорт егете китеп бара. Яуырынына һалған таяҡҡа бәйләм, төйөнсөк аҫҡан. Ҡояш ҡыҙҙыра, далала бер йән эйәһе лә күҙгә салынмай. Бына, алыҫ түгел, йәшел ҡыуаҡтар күренде, япраҡтар араһынан ялтырап йылға күренде. Егет юлдан ситкә боролоп, яр буйына килде, башлығын сисеп, төйөнсөгөн һүтеп, тамаҡ ялғап алды. Йылғанан һыу һоҫоп, һыуһынын ҡандырҙы. Үҙе килгән яҡҡа күҙ һалды: алыҫта, алһыуланып торған болоттарға оҡшап, тауҙар күренә әле. Оҙаҡ ҡарап ултырҙы егет шул яҡҡа, күҙҙәрендә ике бөртөк йәш күренде. Ҡуйынынан ҡурайын килтереп сығарҙы. Йылға һәм дала талғын ғына моң эсендә иҙрәне.

*Тыуған ғына яҡтан сығып*
*киттем,*
*Ғәзиз Уралымды ҡалдырып.*
*Йәнем һөйгән йәрҙе эҙләп*
*киттем,*
*Аяҡ-ҡулдарымды талдырып.*

Йыраусы, сәстәрен йыйып, башлығын кейҙе лә, төйөнсөгөн артмаҡлап, юлын дауам итте.

Ҡояш инде кискә табан ауыша. Егет артына әйләнеп ҡарай. Инде тауҙар ҙа күренмәй, ҡайҙа ҡарама - икһеҙ-сикһеҙ ҡылғанлы дала. Алыҫта ниҙер күренде...

Ҡараһа - диңгеҙ! Туҡтап ҡалды башҡорт. Ҡайҙа барырға? Берәй нисек ситләп үтеп булмаймы икән? Юҡ, бөтә ерҙә - һыу.

- Барып етәйем әле, - тип уйлай ул, - бәлки, кәмә табылыр.

Оҙаҡ барҙы егет, тик, күпме генә бармаһын, диңгеҙ тигәне алыҫайҙы ла алыҫайҙы, торабирә бөтөнләй юҡҡа сыҡты. Егет көтөүсе башҡорттарҙың һөйләгәндәрен иҫенә төшөрҙө. Уларҙың да юлда диңгеҙ осратҡандары булған, тик был хикмәттең бары тик шайтандың шаярыуы икәнен улар яҡшы белгән. Кискә табан тирмәләр күренде - нуғайҙарҙың йәйләүе икән. Шундуҡ егеттең ҡаршыһына һыбайлылар килеп сыҡты. Егетте уратып алдылар.

- Ҡайҙарға юл тотаһың? - тип һораны бер ҡарт.

- Бохараға китеп барам, - тине егет, - ағайым унда йәшәй.

- Ни йомош менән?

- Атайым ебәрҙе. Ағайымды алып ҡайтырға ҡушты.

Нуғайҙар үҙ-ара ниҙер һөйләштеләр ҙә егеткә баштан аяҡ күҙ ташланылар.

- Төйөнсөгөндә нимә?

Күлдәк, салбар, таҫтамал һәм икмәк.

- Атла, - тине ҡарт. - Байғош!

Тик шул саҡ бер йәш нуғай егетте туҡтатты ла:

- Ҡуйыныңда ни йәшерәһең, - тип һораны.

Егет ҡурайын килтереп сығарҙы.

- Ә, һыҙғыртҡыс! Уйна әле! Башҡорт уйнап ебәрҙе.

- Яҡшы. Әйҙә әле беҙҙең менән!

Егет уйнай-уйнай барҙы, ә нуғайҙар уның тирәләй юрттырып килде. Ҡурай тауышын ишетеп, урамға балалар йүгереп сыҡты, тирмәләрҙән баштарына аҡ яулыҡ япҡан ҡатындар күренде, түнәрәк йөҙлө, өҫтәренә халат кейгән ирҙәр килеп сыҡты. Һыбайлылар һөрән һала:

- Бына кемде алып киләбеҙ!

Халыҡ йыйылып китте, бөтәһенең дә башҡорттоң уйнағанын тыңлағыһы килә. Бай итеп биҙәлгән иң ҙур тирмә эргәһендә балаҫ өҫтөндә хужа кеше ултыра, кәүҙәгә ҙур, үҙе биҙәкле ебәк бишмәт кейгән. Тоҫтаҡҡа ҡымыҙ тултырып, егеткә һуҙа.

- Эс, - ти ул, - арығанһыңдыр.

Йөҙәрләгән күҙҙәр, мөгжизәләй күреп, егеткә төбәлгән. Ҡатын-ҡыҙ ситтәрәк тора, күбеһе матур егеткә ҡарап, ниҙер һөйләшә һәм йылмайып ҡуя.

- Бына хәҙер уйна, малай!

Ҡурайсы уйнап ебәрҙе. Тыуған яғы, Башҡортостандың хозур тәбиғәте, башҡорттарҙың тыныс тормошо тураһында ине көй. Унан ҡурай тауыштары һағышлы яңғырай башланы, ҡайғы-хәсрәт ишетелде ҡурай моңонда. Нуғайҙарҙың ҡырыҫ йөҙҙәре нурланды, ҡараштары моңланды. Ҡатындар ипләп кенә күрһөнөп ҡуйҙы, ҡыҙҙарҙың күҙҙәренә йәш килде.

- Яҡшы, бик яҡшы, - тигән тауыштар ишетелде.

Ҡурайсы тын алырға туҡтағайны, тирмәнең хужаһы:

- Бигерәк шәп уйнайһың, малай. Тик йырҙарың үтә һағышлы. Күңеллерәк көйөң юҡмы? - тип һораны.

Егет бейеү көйө башланы. Нуғайҙарға оҡшаны был, ҡул саба башланылар.

- Ай, малай! Шәп егет! Әйҙә уйна, күңелдәрҙе елкендер!

Ҙур утлы шар булып, ҡояш байый... Йәйләү ҙә, өйөрҙәр ҙә, дала - барыһы ла ҡояш нурҙарына төрөндө, бар күк йөҙө ут кеүек яна. Ҡурайсы урынынан торҙо.

- Ҡуҙғалырға ваҡыт.

- Тыңла әле, егет, - тине хужа, - ошо юл буйлап барһаң, бер ауыл булыр. Туҡтатһалар, Әхмәт Шакирҙы күрергә ине, тиң. Уға Мәхмүт Гәрәй Тимашевтан сәләм еткерерһең, ҡунағына киләһе ауылға тиклем юл күрһәтеп биреүен һорай, тиерһең. Ул аңлар... Һине беребе лә йәберһетмәҫ, Бохараға имен-аман барып етерһең.

**Таңсулпан БУРАҠАЕВА тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ҮҘ КӨНӨБӨҘҘӨ...

## үҙебеҙ хәстәрләйек



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

**Нияз МӘЖИТОВ, БДУ профессоры, тарих фәндәре докторы, академик:** Һигеҙенсе тиҫтәһен тултырған ғалим-академик булараҡ, үҙемде фән донъяһында, тормошта тәғәйен юлын тапҡан, әле лә шул юлды алып барған кешеләр рәтенә индерер инем. Белгес булып китеүем, фәнгә килеүем туранан-тура Рәсәй вуздарының иң абруйлыларынан һаналған Пермь дәүләт университетында белем алыуыма, ундағы мөғәллимдәрҙең тырышлығына, көсөнә бәйләнгән. Уларҙан алған белем - ғүмерлек белемгә, ә улар үҙҙәре - ғүмерлек уҡытыусыларыма әүерелде. Пермдә кемдәр менән генә осрашманым мин, ниндәй генә милләт кешеләре менән аралашманым. Шуға, төрлө милләттәрҙең дуҫ булыуын яҡланым, бөгөн дә милләттәргә тигеҙ ҡараусы ғалиммын, тиһәм дә, раҫ булыр. Шулай ҙа минең изге Ватаным - Башҡортостаным бар, үҙемдең башҡорт икәнлегемде бер ҡасан да бер кемдән дә йәшермәнем, бөтөн көсөмдө биреп, халҡым файҙаһына эшләнем, артабан да шулай эшләйәсәкмен.

Һуңғы йылдарҙа мин йыш ҡына совет осорон һағынам. Ни өсөн тигәндә, бөгөнгө проблемалар үҙенән-үҙе элекке яҡшыраҡ заманды хәтергә төшөрә. СССР ваҡытында дөйөм тәртип бар, кеше, халыҡ файҙаһына башҡарылған эштәр күп ине.

Бөгөн бигерәк тә республикабыҙҙа мәктәптәрҙең күпләп ябылыуы борсоуға һала мине. Мәҫәлән, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында мин, бутән тиҫтерҙәрем кеүек үк, 30-ға яҡын йорттан торған тыуған ауылым Туғайҙа (Ғафури районы) 4 синыфлыҡ белем алыу мөмкинлегенә эйә инем. Илдә оло һуғыш барған, кешеләрҙең ашарына - ризыҡ, өҫтөнә - йүнле кейем дә булмаған саҡта беҙҙеке һымаҡ бәләкәй ауылдарҙа ла мәктәптәр ябылманы. Ул ғына ла түгел, хатта 1943 йылда күрше Юлыҡ ауылының башланғыс мәктәбе ете йыллыҡ урта мәктәпкә әйләндерелде. Шул уҡ хәл 1946 йылда Имәндәш ауылында ла ҡабатланды. Бер һүҙ менән әйткәндә, мәғарифҡа иғтибарҙы йәлләмәйҙәр ине ул саҡта. Ә хәҙер бөтөн ил буйлап мәктәптәр ябыла, сабый балалар 10-15 саҡрымда ятҡан күрше ауылдарға йәрәп уҡырға мәжбүр ителә. Мин халҡыбыҙҙы наҙанлыҡҡа илтә, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе юҡҡа сығарыуға табан алып бара торған был хәлде һис кенә лә аңлай алмайым.

Мине генә түгел, күптәрҙе борсоуға һалған икенсе мәсьәлә - ауыл ерендә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең крәҫтиән өсөн традицион булған ер эшкәртеү, итһөт етештереү, һ.б. эштәрҙе алып бара алмауы. Колхоз-совхоздар ойошторолған ваҡытта крәҫтиәндең мал-тыуары йыйып алынған алыныуға, ә бына колхоздар бөтөрөлгәс, шул уҡ крәҫтиәнгә бер ниндәй ауыл хужалығы техникаһы ла, һис юғы, ат та бирелмәне. Шунлыҡтан, халыҡ элегерәк юлға һалынған эште дауам итә алманы, бөгөн дә эш алға барғанға оҡшамай. Тейешле ойоштороу булмауын иҫәпкә алып, ауыл хужалығы тормошон яҡшы төшөнгән белгестәр: "Колхоздарҙы аяҡҡа баҫтырырға кәрәк", - тигән саҡырыуы һаһай бөгөн. Мин был фекерҙе тулыһынса хуплайым. Власта ултырыусыларға ғына был тәҡдим барып етмәй шикелле, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы.

Тағы ла шуны иҫкә алмай булмай: совет осоронда, унан һуңғы йылдарҙа ла, Башҡортостан - сәнәғәт үҫеше яғынан иң алдынғы урындарҙа килде. Өфөлә һәм башҡа ҡалаларҙа заводтар күп ине, эшһеҙҙәр бөтөнләй булманы. Ә бөгөн һәр кем (шул иҫәптән мин дә): "Башҡортостаныбыҙ ҡасан элекке хәленә ҡайта инде", - тип хыяллана.

Шулай итеп, милләтебеҙгә генә ҡағылған мәсьәләләр бик күп ул. Беҙ йәмәғәтселек кимәлендә үҙ тормошобоҙҙо яҡшыртыу сараларын үҙ өҫтөбөҙгә алырға тейешбеҙ. Мин 1995-2002 йылдарҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе булып эшләгән осорҙа ошондай мәсьәләләрҙе тормошҡа ашырыуға бөтөн көсөмдө биреп эшләнем. Хәҙер ҙә милләттәштәребеҙҙе, Ватаныбыҙ Башҡортостанды һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү йәһәтенән ошолай эшләргә кәрәк, тип саҡырам.

Һәм тағы. Оҙаҡламай ауыл советтары бөтөрөләсәк һәм улар вазифаларын ауыл старосталары атҡарасаҡ, имеш. Ҡайһы бер райондарҙа был идеяны тормошҡа ашырыу эштәре бөгөн үк бара, тиҙәр. Әгәр ысынлап шулай була ҡалһа, ауыл старосталарын абруйлы, рухлы кешеләрҙән һайларға кәрәк. Бөтөн ауыл тормошонда килеп тыуған мәсьәләләрҙе хәл итеү, ауылдарҙы һаҡлап алып ҡалыу бурыстары уларға йөкмәтеләсәк, тиҙәр бит. Һәр хәлдә, үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ хәстәрләй торған заманда йәшәйбеҙ икәнде бер генә минутҡа ла онотторға ярамай.

**Илгизәр БУЛАТОВ яҙып алды.**

*ЗАУЫҠ*

# ҺИНӘН МИНӘ ҮҘЕҢ КӘРӘК ИНЕҢ,

## Минән һиңә үҙем кәрәкме?



### Миһырбанлыҡ

Балаҫты ла ҡаҡмағанмын -
Ҡарҙары бөтөп бара.
Ҡыштар үтте, үтмәне тик
Йөрәктә ҡалған яра.
Шул яраны төҙәлтер бит
Яҙҙағы миһырбанлыҡ.
Мине ҡотҡарһа, ҡотҡарыр
Эргәмдә һинең барлыҡ.
Күңел тарлығын күпмегә?
Белһәм, иретер инем,
Ғүмерҙе ҡайтарып булһа,
Һине ир итер инем.

### Мираҫ

Йома һайын ямғыр яуа
Һине иҫкә төшөрөп.
Кире ҡайтмаҫыңды беләм -
Тик өшөнөм, өшөнөм.
Әле булһа йылылығың
Йәнемә һеңеп ҡалған.
Хәтерҙе яңыртҡан һайын
Тәндә көйҙөрә ялған.
Үҙ-үҙеңде алдап ҡына
Йәшәгәнһең донъяла.
Ошо хатаң өсөн генә
Кисерә алмай балаң.
Малды артыҡ күргәйнең дә,
Ташлағанда улыңды.
Яттарға ҡалды байлығың,
Хоҙай өҙҙө юлыңды.
Ғәҙеллек бар ер йөҙөндә,-
Күтәрермен ҡайғыны.
Сөнки һинән ҡалған мираҫ -
Улым иң ҙур байлығым.

### Ҡояшым

Ҡабатлатыр өсөн наҙҙарыңды
Теҙләнеп тә һинә иңәлдем.
Эй, аҡылдың түбән нөктәләре,
Үлсәмдәре ғашиҡ кимәлдең!
Нисә йылдар, быуат артта ҡалды,
Кешене бит һөйөү тилертә.
Мөхәббәттән алйыу ғәйеп түгел,
Алдап һөйөүҙәрең илертә...
Һин булғанға яныып йәшәйем мин
Юҡлығыңды хатта тоймайса...
Был донъянан үткән сағымда ла
Китәм һине күреп туймайса.
Ҡалһын шулай, үҙгәрмәһен яҙмыш,
Тамуҡтарҙы килә тояһым.
Һин бит ғазаптарҙан арындырып,
Һүрәнәйә барған ҡояшым!

### Үҙем һөйәм

Һинән миңә бер ни кәрәк түгел,
Һинән миңә бары һин кәрәк...
Ел-дауылдан һаҡлап мин - ҡайынды
Уяу ышыҡлаусы һин - тирәк.
Ҡәрәгенән артыҡ һөйәм һине -
Йәнем мөхәббәттән яралған.
Хыялыйҙай үлеп ярата, тип,
Минең хаҡта ғәйбәт таралған.
Ғәйбәттең дә була һәйбәттәре...
Килер һуҡмаҡтарың һирәкме?
Һинән миңә үҙең кәрәк инең,
Минән һиңә үҙем кәрәкме?
Кәрәк булһам, оҙон төндәремдә
Ҡояш байытмаҫтай таңым һин.
Аҡылдарым томаланған саҡта
Алдан етәкләүсе аңым һин.
Еңел аҡыл менән осрашҡансы
Еңмешлеге еңгән, тиһендәр.
Һинән миңә бер ни кәрәк түгел,
Мине һине һөйгән, тиһендәр.

**Римма ҒӘЛИМОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИҢ СӘЛӘМӘТ ИЛ...
## Япония

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн файҙалы булған аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Исемлектең башында һоло бутҡаһы тора. Был бутҡала фолий кислотаһы, калий күп. Исемлекте артабан ҡан баҫымын төшөрөүсе, ҡан ойошоуға тәьҫир итеүсе һөмбаш балыҡ (лосось) дауам итә. Артабан - авокадо һәм зәйтүн майы: улар холестерин кимәлен түбәнәйтә. Бишенсе урында - сөтләүектәр: уларҙа омега-3 майлы кислоталар күп. Артабан - көртмәлө, ҡурай еләге һәм ер еләге: улар организмдағы шешеү процестарын туҡтата. Етенсе урында омега-3 майлы кислоталарға һәм калийға бай ҡуҙаҡлылар алып тора. Һигеҙенсе урында шпинат, унда лютеин, калий, фолий кислотаһы бар. Етен майы туғыҙынсы урында. Исемлекте холестерин кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итеүсе соя продукттары тамамлай.

■ Вестмид Миллениум медицина тикшеренеүҙәре институты ғалимдары билдәләүенсә, беҙҙең биоритмдар эшмәкәрлеген бауыр контролдә тота. Бауырҙа май, энергия алышыныуы метаболизмы, шулай уҡ гормондар бүленеп сығыуға яуаплы рецепторҙар бар, уларҙың эше йоҡоға, аппетитҡа һәм иғтибарға йоғонто яһай. Ритмдарҙың боҙолоуы иһә һимереүгә, диабетҡа һәм организмда матдәләр алышыныуының башҡа тайпылыштарын барлыҡҡа килтерә. Алдараҡ билдәле булыуынса, биологик сәғәттәрҙең боҙолоуы тиренең иртә ҡартайыуына, тире яман шешенә килтереүе бар. Шуға ла биологик сәғәттәрҙе көйләп ебәреү был проблемаларҙы булдырмаҫҡа ярҙам итәсәк.

■ Социаль селтәрҙәрҙе ҡулланмау аҡыл һәм ихтыяр көсө тураһында һөйләй, тип белдерә Австрияның бер төркөм социологтары һәм психологтары. "Facebook" менән ҡулланыусыларҙан баш тартыусылар араһында һорау алыуҙар үткәрелгән. Былай кешеләрҙең 71,5 проценты - ир-егеттәр, уртаса йәше - 31 йәш, шулай ҙа улар араһында 11 йәштән 75 йәшкә тиклемгеләр ҙә осраған. Улар 47 илдә йәшәй, уларҙың "ташланған" онлайн-дуҫтарының һаны яҡынса - 133 кеше. Асыҡланыуынса, "социаль селтәр донъяһынан баш тартыусылар ғәҙәти тормошта күпкә теүәлерәк, һағыраҡ һәм аҡыллыраҡ". Шулай ҙа уларҙың виртуаль аралашыуҙан баш тартыуының үҙ сәбәптәре лә бар, мәҫәлән, 48 процент яуап биреүсе үҙенең шәхси мәғлүмәттәренең хәүефһеҙлеге өсөн борсолған, икенсе урында ғына кеше был донъяның үҙен нығыраҡ ылыҡтыра башлауын тойған. Өсөнсө сәбәп - яуап биреүселәр "Facebook"тағы "дуҫтары"ның ҡылығын оҡшатмаған, уларҙың төрлө сараларға саҡырыуын артыҡ әрһеҙлек тип иҫәпләй. Виртуаль һәм ысын дуҫ араһында айырма барлығын барыһы ла билдәләгән.

■ Рәсәй иң бәхетле ил рейтингыһында үҙенең позицияһын яҡшыртҡан һәм 68-се урынды биләгән. World Happiness Report билдәләүенсә, беҙҙең ил былтырғы йыл менән сағыштырғанда һигеҙ урынға өсҡәрәк менгән. Рейтингта халыҡ иҫәбенә эске тулайым продукт, йәмғиәттәге ышаныс, коррупция, шулай уҡ йомартлыҡ кимәлдәре, фаразланған ғүмер оҙайлылығы, һайлау мөмкинлеге булыуы күрһәткестәре сағыштырылған. Рейтингта һәр ваҡыттағыса Дания менән Норвегия лидерҙар булып тора. Өсөнсө урынды элек Финляндия алып торһа, хәҙер - Швейцария. Шулай уҡ тәүге бишәү исемлегенә традицион бәхетле илдәр Нидерландтар һәм Швеция ингән. Иң сәләмәт ил тип Япония табылған.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Кешенең үҙ-үҙенә ҡуйған диагноздары араһында "депрессия" "һалҡын тейгән" тигән диагноздан ҡала иң популяры булып торалыр, моғайын. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, депрессия киң таралаған ауырыуҙар рейтингында иң беренсе урынға яҡынлашып килә. Әлеге мәлдә цивилизациялы кешелектә 40 процент халыҡ ошо диагноз менән йәшәй, имеш. Депрессияны ҡасан һәм нисек дауаларға? Иң мөһиме, бөгөн был модалы һүҙ менән нимәне атайҙар һуң, әйҙәгеҙ ошолар хаҡында һөйләшәйек.**

# ДЕПРЕССИЯ...
## кәйефме, әллә диагнозмы?



### Тәбиғи хәл

Ваҡыты-ваҡыты менән күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп алыу - тәбиғи хәл. Хатта ҡандағы шәкәр кимәлен йәки артериаль ҡан баҫымын даими күҙәтеп, контролдә тотоп булмай, шуға ла депрессияны ла алдан күҙаллау мөмкин түгел. Ғөмүмән, ғалимдар билдәләүенсә, депрессия - ул үҙеңде баһалау, үҙеңде ҡабул итеүҙең, яратыуҙың бер аҙ үҙгәреп тороуы ғына. Йәғни, депрессия - беҙҙең шыма ғына юлдан барған тормошобоҙҙо бер аҙ сайҡалдырып алған хәлдәргә тәбиғи реакция. Ул шул тиклем тәбиғи, хатта яңы тыуған сабыйҙарҙа ла булыуы ихтимал. Кеше күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, элеккесә аралашмай башлай, әүҙемлеген юғалта, йәғни, ул үҙен ошо кире ваҡиғаларҙан һаҡлай, бер үк ваҡытта көс тә туплай. Белгестәр әйтеүенсә, был нормаль күренеш. Ә бына бер ваҡытта ла күңелһеҙләнмәгән кеше, киреһенсә, тулыһынса сәләмәт түгел.

### Пьеро битлеге

Донъяла бер кеше икенсеһенә тулыһынса оҡшамаған, шуға ла улар төрлөсә күңелһеҙләнә икән. Шулай ҙа депрессиялағы кешеләрҙең уртаҡ яҡтары ла бар: быға тиклем күңел күтәренкелеге биргән нәмәләрҙән йәм тапмай башлау, шатланыу, ғәжәпләнеү тойғоһон юғалтыу. Ауырыу көслө тойғолар кисермәй башлай. Һөҙөмтәлә был тормошта үҙ урынын юғалтҡан кеше үҙҙе менән генә тороп ҡала. Әммә депрессияның мәкерлеге шунда: ул кире уйҙар, ҡараңғы төҫтәр, күңел төшөнкөлөгө менән генә билдәләнмәй. Депрессиялағы кешенең портреты түбәндәгесә булыуы ихтимал - кеше көндән-көн яйыраҡ хәрәкәтләнә, яйыраҡ һөйләшә, йырындар төшә, ҡаштар араһында һырҙар барлыҡҡа килә, ауыҙ ситтәре түбәнгә һалына, ниндәйҙер кимәлдә кеше Пьероның битлеген "кейә".

Быныҡ менән генә барыһы ла тамамланмай шул. Дөйөм матдәләр әйләнеше һүлпәнәйгәнлектән, гел йоҡо килә йәки, киреһенсә, түҙеп торғоһоҙ йоҡоһоҙлоҡ барлыҡҡа килә, тире кибә, ҡоро күҙ синдромы үҫешә, аппетит юғала йәки ныҡ күтәрелә. Сәстәр, шулай уҡ күҙ ҡарашы тоҫһоҙләнә, йөҙгә һағыш күләгәһе ята. Әгәр ҙә дауаламаһың, депрессия тағы ла тәрәнәйә төшә, кешенең аңын ғына түгел, тәнен дә "ашай". Йылмайып торған депрессия ла була. Кеше һәр ваҡыттағыса йылмая, аралаша, әммә уны, мәҫәлән, баш ауыртыуы, йоҡоһоҙлоҡ, арҡа ауыртыуы борсой. Психиатрҙар быны йәшерен депрессия тип атай. Шулай уҡ тәжрибәле невролог "радикулит" диагнозында мотлаҡ антидепрессанттар ҙа тәҡдим итәсәк. Депрессив һыҙланыуҙы айырыу өсөн классик тест бар - ғәҙәттә, бындай ауырыуҙарҙың хәле иртән насар, ә кисен яҡшы, йәки - киреһенсә.

### Сиктәре бармы?

Ошо урында уҡыусыла логик һорау тыуыуы ихтимал: тимәк, кешелектең яртыһы психик сирлеме? Бәхеткә күрә, юҡ, ғалимдар раҫлауынса, бар нәмәне лә депрессия менән бәйләргә ярамай. Кешеләр быуаттар буйына бер үк төрлө ауырлыҡтар аша үтә: тапшыра алмаған имтихан, яуапһыҙ мөхәббәт, пландарҙың емерелеүе, көҙҙең болотло көндәре... Насар кәйефле кешеләрҙең барыһына ла психиатрик диагноз ҡуйып булмай ҙа инде. Әммә улар араһындағы айырманы нисек белергә һуң? Яуап ябай: беҙ ни өсөн күңелһеҙләнгәнебеҙҙе беләбеҙ икән, был клиник депрессия түгел. Етмәһә, күңелһеҙләнеү тиҙ арала үтә икән, бөтөнләй борсолорға кәрәкмәй.

Ә бына үҙ-үҙеңде ғәйепләү, үлем тураһындағы уйҙар йонсота икән - мотлаҡ белгескә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Юғиһә, депрессияның классик билдәләре йәшәргә һәм эшләргә ҡамасаулай. Күңел төшөнкөлөгө 1-2 аҙнаға һуҙыла икән, шулай уҡ хәүефләнергә кәрәк.

### Их, һин, сепрәк...

Әгәр ҙә депрессия яҡын кешеләрегеҙҙә күҙәтелһә, нимә эшләргә? Иң киң таралған хата - уның иғтибарын ситкә йүнәлтергә теләү, "кит әле", "шул да булдымы проблема" тигәнерәк типтағы кәңәштәр биреү. Быларҙың файҙаһы юҡ. Ғалимдар фекеренсә, бер нәмә әйтмәҫкә лә мөмкин, әгәр ҙә кешене аңлайһың һәм хәлен тояһың икән, уның янында булыу ҙа етә. Оҙайға һуҙылған депрессиянан тәжрибәле психотерапевт ҡотҡара ала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Эйе, юҡ ҡына проблема алдында ла бөгөлөп төшөп, ялҡаулыкты ла, ихтыярһыҙлыкты ла депрессияға һылтап ҡуйыусылар бар. Шулай ҙа депрессияның ярайһы етди сир икәнен иҫәпкә алып, яҡындарыбыҙға иғтибарлыраҡ булып өйрәнергә һәм бер секунд буш ваҡытыбыҙ булмаганда ла, уларға үҙ мәленә ярҙам ҡулы һуҙып өлгөрөргә лә кәрәк. Кеше бөгөн тәне тураһында бөтөн нәмәне белһә лә, ябай ғына күңел көсөргәнешенән нисек һаҡланырға икәнлеген белмәй. Доғалар уҡығыҙ, матур уйҙар менән йәшәгеҙ, һис булмаһа, көнсығыш мәҙәниәтенең матур өлгөләре, мәҫәлән, медитацияға өйрәнеү һеҙгә депрессияға бирелмәҫкә ярҙам итәсәк. Әлбиттә, үҙеңдең эске донъяңа сумып ҡына йәшәү шулай уҡ кире күренеш, шуға ла яуапты үҙеңдә генә түгел, ситтә - тышҡы донъяла ла эҙләргә кәңәш итәбеҙ. Сәләмәт булығыҙ!**

Ләйсән ДАЯНОВА әҙерләне.

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# УҠЫУ, ЭШЛӘҮ, СПОРТ...
## зарарлымы?

**Ғалимдар төрлө тикшеренеүҙәр үткәреп, барыһына ла билдәле түбәндәге мәғлүмәттәрҙе шик аҫтына ҡуйған.**

### Күнекмәләр ҙә ҡартайта

Лафборо университеты (Бөйөк Британия) профессоры Джэми Тиммонс ҡыҙыҡ һығымтаға килгән. Ул мускулдарҙың ҡартайыуы менән бәйле үҙенсәлекле химик маркерҙар тапҡан. Улар буйынса күнекмәләр мускулдарға нисек тәьҫир итеүен асыҡларға була. Тиммонс спорт менән әүҙем шөғөлләнгән йөҙләгән кешеләрҙең физик формаһын баһалаған. Һөҙөмтәлә, күптәрҙең мускулдарын физик күнекмәләр менән үҙгәртеп булмағанлығы асыҡланған.

-Ҡартая барған һайын мускулдарҙың йомшарыуы физик әүҙемлек етмәүҙән түгел, ә кешенең үҙенең физиологик үҙенсәлегенә бәйле, - тип аңлата профессор Тимонс. - Күп кешеләрҙең көүҙә төҙөлөшө шундай: улар, ғөмүмән, мускул массаһын үҫтерә лә, нығыта ла алмай.

Әлбиттә, был асыш һеҙҙе, исмаһам, иртәнге күнекмәләр яһауҙан азат итмәй. Профессор әйтеүенсә, спорт планета халҡының 25 процентына ғына файҙаһыҙ.

### Эштән аттар... үлә

Массачусетс университетының ғалимдары (АҠШ) тағы бер нығынған стереотипты кире ҡаға. Ике тиҫтә йыл дауамында улар төрлө предприятиеларҙа хеҙмәт итеүсе менәрләгән кешеләрҙең эш графигын өйрәнгән. Шул асыҡланған: артыҡ эшһөйәрлек сәләмәтлек өсөн зыянлы ғына түгел, хатта алкоголь һәм никотинға ҡарағанда ла насарыраҡ тәьҫир итә.

Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә 11 сәғәт эшләгән кешеләрҙә инфаркт хәүефе 70 процентҡа тиклем

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҠАТЫНЫ МЕНӘН АРАЛАШҠАНДА...

## ир-егет үтәргә тейешле 30 ҡағиҙә



10. Ҡатын-ҡыҙға һис ҡул күтәрергә ярамай. Ҡайһы бер кешеләр Ҡөрьән аяттарын яңылыш аңлап, көсһеҙ заттарға ҡарата көс ҡуллана башлай. Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә "Әгәр ир-егет ҡатынына ҡул күтәрә икән, Ҡиәмәт көнөндә мин үҙем Аллаһ алдында был кешегә ҡаршы геүаһлек итәсәкмен", тип әйтә.

11. Аллаһ әмерен үтәүҙә иғтибарһыҙлыҡ күрһәткәне өсөн хәләл ефет менән бер көндән дә оҙағыраҡ ыҙғышта булырға ярамай.

12. Шулай уҡ ир-егет ҡатынының бәғзе бер осраҡтарҙа күрһәткән тәрбиәһеҙлегенә лә түҙергә бурыслы. Ҡатын кешенең салыш ҡабырға һөйәгенән яратылғанын һәм ир кешегә аманатҡа бирелгәнен оноторға ярамай.

13. Ҡатынының холҡонда насар яҡтарға үҙгәреүҙәрҙе күргәс, ир кеше беренсе сираттта үҙен ғәйепләргә тейеш. "Мин үҙемде дөрөҫ тотһам, ул быныдайға әйләнмәҫ ине", тип уйларға тейеш. Бер әүлиәнән, ни өсөн унын оҙаҡ итеп үҙенең мыжыҡ ҡатынының ҡыланыштарына түҙеүен һорағандар. Ул: "Мин ҡатынымды айырғандан һуң ул башҡа берәүгә сығасаҡ. Ә ул кеше минең кеүек түҙемле булмаясаҡ. Минең арҡала улар икеһе лә бәхетһеҙ буласаҡ", - тип яуап биргән.

14. Ҡатын кеше асыуланһа һәм бәхәс низағҡа әйләнә башлаһа, ир кешегә шымып ҡалыу иң яҡшыһы. Ҡатын уйланыр һәм ғәфү үтенер, сөнки гүзәл заттар ир-егеттәрҙең уҫал тынлығы алдында көсһеҙ.

15. Ҡатыны ғаиләләге бурыстарын урынына еткереп һәм ҙур ҡәнәғәтлек менән эшләй икән, ир-егет доғаларында Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтен белдерергә тейеш. Сөнки бындай ҡатын - Аллаһы Тәғәләнең иң ҡиммәтле донъя бүләге.

16. Ҡатын менән иғтибарлы һәм мөләйем мөғәмәлә итергә кәрәк. Шул саҡта ғына ул үҙенең яратылғанын аңлаясаҡ һәм иренең ҡәҙерен beләсәк.

17. Ир кеше магазинға һәм баҙарға азыҡ-түлек артынан йөрөүҙе үҙ өҫтөнә алырға тейеш. Ғаилә мәсьәләләрендә хәләл ефет менән кәңәшләшеү мотлаҡ. Шул уҡ ваҡытта ғаиләгә бәйле булмаған башҡа (мәҫәлән, эштәге) мәсьәләләрҙе хәл итеүгә ҡатынды йәлеп итергә кәрәкмәй. Унын былай ҙа хәстәрҙәре етерлек.

18. Ир-егет, ҡатынының гонаһҡа килтерә торған кәнәштәренә эйәреп китмәҫ өсөн, уяу булырға бурыслы. Ғаилә башлығы ҡатын-ҡыҙ түгел, ә ир-егет.

19. Ҡатынының гонаһҡа килтермәгән етешһеҙлектәрен, хаталарын күрмәмешкә һалышһа, ир-егет зирәклек күрһәтәсәк. Әгәр хәләл ефете гонаһ эшләүгә алып барған һүҙҙәр әйтһә һәм ҡылыҡтар эшләһә, ир-егет хаталаныуын аңлатып, уны туктатырға тейеш. Әгәр ниндәйҙер етешһеҙлегенән ваз кисһә, ҡатын-ҡыҙға бүләк вәғәҙә итергә һәм вәғәҙәне үтәргә кәрәк. Һәр осраҡта сабырлыҡты юғалтмау мөһим.

20. Бер-береңдең серҙәрен һәм етешһеҙлектәрен башҡаларға таратырға ярамай.

21. Ғаилә ялын ойоштора белеү ҙә бик мөһим. Тормош иптәшең менән шаярып, уйнап алыуҙың да бер зыяны юҡ. Мәҫәлән, Бәйғәмбәребеҙ ҡатыны Ғәйшә менән йүгереүҙә ярышҡан.

22. Өйләнер алдынан ир-егет үҙҙәренең ҡайҙа йәшәйәсәктәрен алдан хәстәрләргә бурыслы. Әгәр улар йортто ҡуртымға йә һатып ала икән, ғаилә именлеге өсөн зыян килтерерҙәй (экологик таҙалыҡ менән бергә, төнгө клуб кеүек кешенең рухи донъяһына зыян килтергән) урындарҙан йыраҡыраҡ булыу мөһим. Дин ҡәрҙәштәр күп йәшәгән урындарҙа йәшәү хуплана. Уртаҡ ҡиммәттәр булған кешеләр генә яҡшы күрше, кәңәшсе булып китә ала.

23. Ир-егет ҡатынын шәриғәт буйынса йөрөргә ярамаған урындарға барыуҙан тыйырға бурыслы.

24. Ир-егет ҡатынын Ҡөрьән уҡырға, хәләлде харамдан айырырға өйрәтергә тейеш. Ғаилә ағзаларын ярамағандан тыйылырға өйрәтмәгәндә, ғаилә башлығын тамуҡ уты көтөүен онотмаҫҡа тейеш.

25. Шәриғәткә ярашлы, енси тормошҡа бәйле мәсьәләләрҙе белеү мотлаҡ. Был ғилемде имамдарҙан, дини китаптарҙан алырға кәрәк.

26. Ғаиләләге ҡатын-ҡыҙ затынан булған ағзалар шәриғәт буйынса кейенмәйенсә йөрөйҙәр икән, ул саҡта ғаилә башлығы һәм өйҙәге бар ирҙәр Ҡиәмәт көнөндә быныӊ өсөн яуап бирәсәктәрен аңларға тейеш.

27. Хәләл ефетенең ризалығын алмайынса, ир кеше сәйәхәткә сыға алмай. Шулай уҡ икенсе һәм сираттағы хаж ғәмәлен үтәгәндә ҡатын-ҡыҙҙың ризалығын алыу мөһим.

28. Әгәр беренсе ҡатыны шәриғәт талаптарын урынына еткереп үтәй, иренә итәғәтлек күрһәтә икән, ир-егеткә икенсе ҡатын алыу кәнәш ителмәй. Бәйғәмбәр "Әгәр берәү ике кәләше була тороп, уларға ғәҙел мөғәмәлә итмәһә, Ҡиәмәт көнөндә мәхшәр яланына яртылаш көкрәйгән килеш киләсәк", тип әйтә.

29. Ир-егет хәләл ефетенә үҙенең проблемалары, дошмандары, бурыстары хаҡында һөйләргә тейеш түгел.

30. Ир-егет ҡайҙа ғына булһа ла, ҡатынына бәрәкәт, бәхет, ниғмәттәр бир, тип, Аллаһы Тәғәләгә ялбарырға тейеш. Сөнки хәләл ефет - ир-егеттең тормош иптәше генә түгел, дуҫы, балаларының тәрбиәсеһе, өй усағын һаҡлаусы.

Динде яратҡан һәм белгән ир-егеттәр бар эштәрендә лә шәриғәткә эйәрергә тырыша. Шәриғәткә эйәреү кешенең үҙенә генә файҙа килтермәйәсәк, ғаиләһенә лә яҡшы йоғонто яһаясаҡ. Ғаиләлә, йәмғиәттә шәхес-ара мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртасаҡ. Шуға күрә лә ҡатынын, балаларын яратҡан, уларға ике донъя бәхетен теләгән мосолман, рухи яҡтан үҙе камиллаштырып, ҡулы аҫтында булғандарға яҡшы остазға әйләнергә тейеш. Харамға илткән нәмәләр тулып ятҡан дәүерҙә, ғүмер юлын ошо бысраҡлыҡтарға буямайынса һәм ғаиләнән буятмайынса үткән иманлы ир-егеттәр Раббыныӊ ризалығына ирешәсәк. Әхирәттә лә ғаиләһе менән бергә йәннәттә осрашасаҡ.

Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ әҙерләне.

(Аҙағы. Башы 38-се һанда).

күтәрелә. Артыҡ эшләүселәрҙең 60 проценты һалҡын тейҙереп йышыраҡ ауырый, улар араһында тәрлө йәрәхәт алыусылар ҙа күберәк. Көнөнә 8 сәғәт эшләүселәр үҙҙәрен сәләмәтерәк тоя икән.

### Генийҙарҙың... әсе һабағы

Бөтөн замандарҙа ла артыҡ тырышып уҡыусыларға ҡараш бик үк ыңғай түгел. "Ятлай-ятлай яҡшы уҡыу менәнме, улар бит тормошҡа бөтөнләй яраҡлашмаған. Бушҡа ғына һаулығын бөтөрөп, дәреслек тотоп ултыралар", - тигәндә барыбыҙ ҙа ишеткәне бар.

Психологтар раҫлауынса, ысынлап та, быныдай кешеләрҙең көсһеҙ урындары шул тиклем күп. Яңыраҡ Сент-Эндрюс ҡалаһы университеты (Бөйөк Британия) белгестәре был фекерҙе тағы бер тапҡыр дәлилләне. Ғалимдар компьютер ярҙамында бер төркөм кешеләрҙең тереклек булмаған утрауға әләгеү ситуацияһын булдырған. Виртуаль робинзондарға ҡатмарлы шарттарҙа ғүмерен һаҡлап ҡалырға ғына түгел, ә үҙҙәренә ризыҡ табырға һәм торлаҡ ҡорорға кәрәк булған. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар башҡа төркөмдәрҙе күҙәтә һәм уңышлы тип табылған тәкдимдәрҙе ҡабатлай алған, шул уҡ ваҡытта үҙҙәре лә төрлө тәкдимдәр индерә алған. Үҙенде тотоуҙың иң һөҙөмтәле моделе өсөн 10 мең евро бүләк вәғәҙә ителгән.

Йәҙләгән команда үҙ-ара бер нисә ай дауамында көс һынашҡан. Еңеүгә максималь рәүештә башҡаларҙың ҡылыҡтарын ҡабатлаусы, уларҙың уңышлы тәкдимдәрен ҡулланыусы студенттар төркөмө өлгәшкән.

-Уларҙың бер яңы тәкдиме лә булманы, - тип уларҙың уңышына аптырай тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе биолог Кевин Лаланд. - Баҡтиһәң, башҡалар уйлап тапҡан яңы идеяларҙы ҡабатлау - тормошта үҙеңде һаҡлап ҡалыу өсөн иң ҡулайлы ысул булып сыҡты. Кем яңы ысулдар эҙләне, улар премияһыҙ ҡалды, ә уларға дөрөҫ юлды табыу өсөн күп ауырлыҡтарҙы еңергә, күп хаталарҙы төҙәтергә кәрәк булды.

Ысынлап та, йыш ҡына генийҙар һәм яңылыҡ уйлап табыусылар үҙҙәренең уңыштарының емештәрен татый алмай. Уларҙың идеяларында башҡалар - бик үк аҡыллы түгелдәр һәм бик күп нәмә белмәгәндәр, әммә хәйләкәр булғандар уңыш ҡаҙана.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Ун икенсе көн.

**Беренсе бүлек: аҡыл. Рух ныҡлығын күнектереү графигын төҙөү**

Медитация, иғтибар туплау, тәрән итеп тын алыу һәм визуалләштереү (күҙ алдына килтереү) һеҙҙең арсеналда уңыш ҡоралы булып тора. Хәҙер инде ошо нигеҙҙә көндәлек күнегеүҙәр графигын төҙөү мөһим. Ул һеҙгә һөҙөмтәле эшмәкәрлегегеҙҙең иң төбәһенә менергә ярҙам итер. Һәр иртән 30-40 минутығыҙҙы үҙегеҙҙе үҫтереүгә бүлегеҙ һәм быны ни тиклем иртәрәк эшләйһегеҙ, шул тиклем яҡшы.

а) Биш минут: үҙегеҙгә уңыш тураһында биш һорау бирегеҙ:

➔ был көн иң иҫтәлекле булһын өсөн нимә эшләйәсәкмен?
➔ бөгөнгө көнгә нимә өсөн рәхмәтлемен?
➔ бөгөн үҙемдә нимәне яҡшыртасаҡмын?
➔ бөгөн кемгә хеҙмәт күрһәтәсәкмен?
➔ бөгөн мине нимә ҡыуандырасаҡ?

б) 15 минут: медитация ярҙамында үҙегеҙҙе тыныс торошҡа килтерегеҙ

Медитация миллионлаған уңышлы кеше тарафынан ҡулланыла һәм бөгөн ул модалы йүнәлеш. Билдәле атлеттар юғары һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн медитация ҡуллана һәм һеҙ ҙә шулай эшләй алаһығыҙ. 15 минут матур сәскәгә йәки икенсе иғтибарҙы йәлеп итерлек предметҡа ҡарап, башҡа бер нәмә тураһында ла уйламай ултырығыҙ.

в) 10 минут: үҙегеҙҙе ошо көндө бәхетле йәшәүгә илһамландырығыҙ

"Бәхет - тәғәйенләнеш урыны түгел, ә сәйәхәт итеү ысулы", - тигән Маргарет Ранбек. Хаҡ һүҙҙәр, шуға күрә тормоштоң һәр секундын бәхетле итеп тойорға кәрәк.

Бөтөн фокус шунда: үҙеңде бәхетле фекерҙәр һәм әйберҙәр менән уратып, бәхетле булыуҙы үҙеңдең ғәҙәтең итеп алырға кәрәк. Бәхет - ул бөтөнләй һеҙ лотерея билетына ҙур сумма отоу йәки вазифағыҙҙа юғарыраҡ күтәрелеү түгел. Донъялағы иң бәхетле кешеләрҙең ҡайһы берҙәре бик ярлы, күптәренә ҙур ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға тура килгән. Әммә улар үҙҙәрендә бөтөн нәмәнән бары тик ыңғай яҡтарын ғына табыу ғәҙәтен үҫтергәндәр. Үҙегеҙҙе илһамландырыусы, дәртләндереүсе китаптар, аудиояҙмалар һәм картиналар менән уратып алығыҙ.

**Икенсе бүлек: тән. Маҡсаттарығыҙҙы барлағыҙ**

Беренсе көндән үк физик әҙерлегегеҙ буйынса ҡуйған маҡсатығыҙҙы ҡабаттан ҡыҙҙан үткәрегеҙ. Уларға яҡынлашыу өсөн һәр көн нимә эшләйһегеҙ? Үҙегеҙҙең ҡараштарығыҙҙы, ниәттәрегеҙҙе планлаштырыуҙы дауам итегеҙ, маҡсаттарығыҙға өлгәшеүгә йүнәлтелгән илһамландырыусы яҙмалар эшләгеҙ.

**Өсөнсө бүлек: характер. Күңел асыу күнегеүҙәре**

Бөгөнгө күнегеү бик ябай. "Этот прекрасный мир" (Джимми Стюарт ҡатнашлығында) фильмын алып, уны төнгөләккә ҡарағыҙ. Ул һеҙҙе нимәгә өйрәтте, унан ниндәй уңыш серҙәрен белдегеҙ?

Робин ШАРМА.

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# НУРИМАН РАЙОНЫ




**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**38-се һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** 1. Әйләнмә. 3. Ғаззалова. 6. Ғарипов. 11. Рифма. 12. Ураҙа. 13. Нанду. 14. Опера. 15. Вәсүәсә. 18. Рамазанов. 21. Саматов. 26. Өләсәй. 28. Мырҡыҫ. 29. Шин. 31. Ғәниев. 33. Ялалов. 34. Ареал. 35. Нарвал. 36. Азимут. 37. Ала. 39. Осирис. 42. Нуриев. 45. Зарипов. 47. Солтанова. 50. Ғәлимов. 55. Осмот. 56. Толом. 57. Сытыр. 58. Кейәү. 59. Йыбытҡы. 60. Континент. 61. Яруллин.

**Вертикаль буйынса:** 1. Әлибаев. 2. Меринос. 4. Алабуға. 5. Внуково. 7. Атакама. 8. Вәкилов. 9. Афина. 10. Макет. 15. Сейә. 17. Әрйә. 19. Артыш. 20. Алкин. 22. Мышы. 23. Тояҡ. 24. Шөғәйепов. 25. Иҫәнбаева. 27. Йоғонос. 28. Моветон. 30. Идеал. 32. Вал. 33. Яла. 37. Армыт. 38. Айран. 40. Игәр. 41. Ижап. 43. Урал. 44. Исем. 45. Зобаный. 46. Оронсоҡ. 48. Онтарио. 49. Ватикан. 51. Әзмәүер. 52. Витамин. 53. Амати. 54. Шлейф.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Сентябрь - октябрь (Зөлҡәғиҙә - Зөлхиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (24) дүшәмбе | 6:48 | 8:18 | 14:30 | 18:23 | 19:53 | 21:23 |
| 1 (25) шишәмбе | 6:50 | 8:20 | 14:30 | 18:20 | 19:50 | 21:20 |
| 2 (26) шаршамбы | 6:52 | 8:22 | 14:30 | 18:18 | 19:48 | 21:18 |
| 3 (27) кесе йома | 6:54 | 8:24 | 14:30 | 18:15 | 19:45 | 21:15 |
| 4 (28) йома | 6:55 | 8:25 | 14:30 | 18:12 | 19:43 | 21:12 |
| 5 (29) шәмбе | 6:57 | 8:27 | 14:30 | 18:10 | 19:40 | 21:10 |
| 6 (1) йәкшәмбе | 6:59 | 8:29 | 14:30 | 18:08 | 19:38 | 21:08 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## *ҠОТЛАЙБЫҘ!*

Сентябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙ - **Өфө ҡалаһынан** Мәрфүғә Мостафина, **Миәкә районы** Садовый ауылынан Фидалиә Садиҡова, **Ғафури районы** Яугилде ауылынан Рәфҡәт Асҡаров, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Илнур Нәҙершин, Солтан Әйүпов, **Мәләүез районы** Смаҡ ауылынан Кинйәбикә Юлмөхәмәтова, Рәзилә Ҡотлогилдина, **Стәрлебаш районы** Мортаза ауылынан Минзиә Аллабирҙина, **Ейәнсура районы** Малай Муйнаҡ ауылынан Гөлназ Аҡбашева, Ибрай ауылынан Гөлдәр Аҡбутина, **Йылайыр районы** Сидоровка ауылынан Ф. Ҡотошева, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Мансур Ғәҙелшин, **Бәләбәй районы** Иҫке Семенкин ауылынан Зарема Ғүмәрова, **Благовещен ҡалаһынан** Миләүшә Шакирова, **Белорет ҡалаһынан** Айгүзәл Нафиҡова, **Бөрйән районы** Иҫке Собханғол ауылынан Рәмилә Юлсурина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ҡайнар ҡотлайбыҙ! Ныҡлы һаулыҡ, ырыҫлы тормош, байлыҡта, муллыҡта, күңел көрлөгөндә йәшәүегеҙҙе теләйбеҙ. Күңелегеҙ гел күтәренке, тыуыр таңдарығыҙ имен булһын, һәр көн уйламаған бәхет-шатлыҡтары менән һөйөндөрөп торһон.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

* * *

Был көндәрҙә матур ғына юбилейҙарын билдәләгән коллегаларыбыҙ -"Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире **Ниязбай Булатбай улы Сәлимовты** һәм "Өмөт" гәзитенең баш мөхәррире **Рәдис Ғилуан улы Ноғомановты** ихлас ҡотлайбыҙ. Төп байлығыбыҙ булыр Һаулыҡтан айырмаһын һеҙҙе Хоҙай. Уҡыусыларығыҙ һеҙҙең баҫмаларҙың ижад емештәрен тағы ла нығыраҡ баһалаһын, һеҙҙең ҡәләмдән сыҡҡан, һеҙҙең йөрәк аша үткән һүҙҙәрҙе ишетһен һәм иш итһен, тип теләйбеҙ.

**Ихлас ҡотлау менән "Киске Өфө"ләр.**

## *СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2 октябрь "Көҙгө моңдар, көҙгө һағыштар"** тип исемләгән концертҡа саҡыра. Башҡорт дәүләт филармонияһының сираттағы миҙгелен асыуға бәйле был концертта Азамат Тимеров, Нәсимә Тимерова, Радик Вәлмөхәмәтов, Рөстәм Ҡудашев, Рушан Биктимеров, Сибәғәт Яруллин, Рәфисә Әсәҙуллина, Венера Рәхмәтуллина композиторҙарыбыҙҙың милли әҫәрҙәрен башҡарасаҡ. Нәфис һүҙ оҫталары Гөлзәмиә Ситдиҡова һәм Илшат Салауатов тамашасыны берсә көлдөрөр, берсә илатыр. Төрлө халыҡтар бейеүҙәрен оҫта башҡарыусы Лилиә Хәжиғәлиева ла концертҡа йәм өҫтәйәсәк.

**КЕМ АЛЫҠ?**

1. Филармония нисәнсе ижад миҙгелен ҡаршылай?
2. Мәҙәни усаҡ составында ниндәй сатира һәм юмор театры бар?

**Телефон: 252-39-99**

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

Йәштәр театры тамашасыларҙы XXIV ижад миҙгелен асыу спектаклдәренә саҡыра.

**1 октябрь** башҡорт труппаһы **"Карт буйҙаҡтар, йәки Шомбай ҡоҙа"** (авторы - Флорид Бүләков, режиссеры - Рөстәм Хәкимов) музыкаль комедияһын тәҡдим итә. Бер-береһен өҙөлөп яратҡан ярлы егет менән бай ҡыҙы бер ҡасан да бергә була алмаҫ кеүек. Әммә уларға башҡорт халҡының фольклор геройы Шомбай ярҙамға килә. Сағыу, төрлө мажараларға бай спектаклде күрергә ашығығыҙ!

АФАРИН!

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ...

## хаҡ юлдан тайпылмаһын, тип




**Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының йәштәр бүлеге тарафынан ойошторолған "Ислам - экстремизмға ҡаршы" акцияһы сиктәрендә баш ҡаланың Салауат Юлаев һәйкәле янындағы майҙанда үткәрелгән сараға байтаҡ халыҡ йыйылды. Башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары сығышы алдынан Рәсәй мосолмандарының Үҙәк Диниә назараты мөфтөйө Тәлғәт Тажетдин, Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты мөфтөйө Нурмөхәмәт Ниғмәтуллин, БР Президенты ҡарамағындағы дәүләт-конфессия ара мөнәсәбәттәр буйынса Совет рәйесе Вячеслав Пятков сығыш яһаны. Ойоштороусылар билдәләүенсә, йәштәрҙе экстремизм кеүек насар күренештәрҙән ҡурсалауҙы маҡсат итеп ҡуйған был сара киләсәктә даими үткәреләсәк. Сарала ҡатнашыусыларҙың бер нисәһенең фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**

**Нурмөхәмәт НИМӘТУЛЛИН, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты мөфтөйө:** Мосолман икенсе кешегә теле менән дә, ҡулы менән дә зарар килтермәй. Ғәҙеллеккә, шәфәғәтлелеккә саҡыра. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, динде үҙҙәренең шәхси мәнфәғәттәрендә ҡулланып, енәйәттәрен аҡлау маҡсатында дини лозунгылар ҡысҡырыусылар ҙа юҡ түгел. Уларҙың эшмәкәрлегенең нәтижәһен төрлө илдәрҙә, Төньяҡ Кавказда күрҙек инде. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе иң камил йән эйәһе итеп яратты ла, беҙгә ғүмер бирҙе. Һәм ул ғүмерҙе изге итте. Ғүмерҙе беҙҙән тартып алыу Аллаһы Тәғәлә ихтыярында. Кем дә кем уға ҡул һуҙа, ул оло гонаһ эшләй. Бәйғәмбәребеҙ: "Бер мосолман икенсе мосолманға ҡул күтәрә икән, уларҙың икеһе лә йәһәннәмдә", - ти.

Ислам беҙҙең халыҡҡа, ерлеккә бөгөн генә килеп ингән дин түгел. Ул ун бер быуат буйы беҙҙең менән, ул беҙгә бәрәкәт, мәғрифәт бирҙе. Әҙәбиәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ, йолалаларыбыҙ, тәрбиә эше башлыса ислам менән бәйләнгән. Ошо юлдан тайпылырға тейеш түгелбеҙ. Мифтахетдин Аҡмулла "Кәңәш" шиғырында "Бер тапалған юлдан ситкә сыҡма", ти. Шуға ла тапалған юлдан ситләшергә, дингә ревизия эшләргә, ят идеяларҙы индерергә кәрәкме? Бөйөк-бөйөк ғалимдарыбыҙ булған, уларҙың юлын дауам итергә һәм йәштәребеҙҙе ошо юлға саҡырырға бурыслыбыҙ. Әгәр дин етәкселәре булып, дин ҡиммәттәрен уларға еткермәһәк, бурысыбыҙ үтәлгән буласаҡмы?

**Эльбрус НИҒМӘТУЛЛИН, Рәсәйҙең иң көслө кешеһе:** Экстремизм темаһы миңә алыҫ. Ундай тайпылышлы кешеләр минең яныма яҡынламай. Уйлауымса, кешенең маҡсаттары, шөғөлләнер эше, мауығыуы булмағанда, бындай ҡырын юлға төшөп китәлер. Ошо хаҡта йәштәр алдында сығыш яһарға саҡырҙылар мине. Спорт экстремизм идеялары таралып китмәүгә булышлыҡ иткән ҡеүәтле ҡорал, тип әйтер инем. Спорт милләтенә, дингә ҡарамайынса, халыҡтарҙы берләштергән нәмә ул. Ҡайҙа ғына барһаң да спортсыларҙы хөрмәт итәләр. Рухи һәм физик яҡтан көслө икәнһең, ҡайҙа ғына булһаң да үҙ урыныңды табасаҡһың. Көс үҙ янына кешеләрҙе тарта, һинең милләтең, телең, мәҙәниәтең, динең менән ҡыҙыҡһына башлайҙар.Минең урыҫ, сит илдәрҙәге дуҫтарым башҡорт телен өйрәнә. Кемдер уларҙы мәжбүр иткәне өсөн түгел, ә мине хөрмәт иткән өсөн.

**Илгиз АБДРАХМАНОВ, йырсы:** Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ яҡшылыҡҡа, мәрхәмәтлеккә, дуҫлыҡҡа, берҙәмлеккә өндәгән. Автомат тотоп, ғауғалашып, фетнә ҡуптарып, кеше үлтереп йөрөүҙең ислам диненә бер ниндәй ҡыҫылышы ла юҡ. Диндән алыҫ булғандар ошо хәҡиҡәтте белмәйенсә, аҙашып йөрөмәһен, ә дингә ихласлап килергә теләүселәр ҡурҡыныс экстремистик ағымдарға эйәреп китмәһен, тигән маҡсатта ойошторолдо ла инде сарабыҙ. Ислам дине ҡыйынлыҡ өсөн ебәрелмәгән. Ошоно аңламаған кешеләр генә динебеҙҙе ҡатмарлаштыра. Үҙҙәренә ниндәйҙер сиктәр ҡуйып, унан сыға алмайынса, күңел төшкөнлөгөнә биреләләр, донъяға асыу барлыҡҡа килә. Ни өсөн сарабыҙҙы башҡорт эстрадаһы йондоҙҙарын йәлеп итеп, концерт формаһында үткәрәбеҙ һуң? Вәғәз һөйләйем, тип, йәштәрҙе мәсеттәргә йәлеп итеп булмай. Хатта ир-егеттәр өсөн фарыз булған йома намаҙына ла йөрөмәй халыҡ. Ә концерт, тиһәң, йәштәр йүгереп килеп етә. Сығыштар араһында аңлайышлы ғына итеп, ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына тезистар менән дин хаҡында мәғлүмәт еткереү өсөн бик тә уңайлы был сарабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Сара тамашасыларҙың күңеленә хуш килде. Йәштәр сығыш яһаусыларҙың барыһын да йылы ҡабул итте. Алдаҡ ҡиммәттәр, насар ғәҙәттәр, аҙғынлыҡ йәштәр мөхитенә үтеп инмәһен, уларға кире йоғонто яһамаһын өсөн, бындай сараларҙың да әһәмиәте барҙыр.**

**Азамат САЛАУАТОВ.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ҠОШСОҠ, ИСЕМЕҢ НИСЕК?



**Һуйыр** - русса глухарь. Был ҡоштарҙың кәүҙә ауырлығы ҡаҙҙыҡына тартым. Урман-тау зонаһында ярайһы уҡ йыш осрай.

**Бытбылдыҡ, бүҙәнә** - русса перепел. Бәләкәй (сыйырсыҡтан бер аҙ ҙурыраҡ) ҡош. Төҫөнә килгәндә, күберәк һоро төҫ өҫтөнлөк итә.

**Ҡыр тауығы** - русса серая куропатка. Ер өҫтөнән йүгереп йөрөүе, йәғни күбеһенсә ерҙә - оҙон үлән йәки ҡыуаҡтар араһында көн итеүе билдәле.

**Тартай, тарттарт** - русса коростель. Беҙҙең халыҡта "Тартай теленән таба" тигән әйтем дә бар. Шулай итеп, был ҡоштоң үҙенсәлектәре шуларҙан ғибәрәт: уны ябай күҙ менән күреп булмай, тауышынан ғына танып, табырға була, тип яҙа белгестәр. Башҡортостандың йылға-күлгә, бейек үләнле сабынлыҡтарға бай райондарында йыш осрай.

**Аҡсарлаҡ, күл сарлағы** - русса озерная чайка. Билдәле бер йырҙа йырланғанса, "Ел бауырлап осҡан ҡоштар аҡсарлаҡ түгелме икән?" Был - ғәҙәти аҡсарлаҡ, ил буйынса бөтөн йылғалар буйында ла тиерлек осрай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рубриканың бөгөнгө яҙмаһына нөктә ҡуйыр алдынан гәзит уҡыусыларға бер һорау, үтенес менән мөрәжәғәт итке килә. Әйҙәгеҙ, ололар ауыҙынан ишетелгән, онотолоп барған һүҙҙәрҙе бергәләп тергеҙәйек. Мәҫәлән, өләсәйҙәр тел күберсегәндә тел аҫтына һалып торорға ҡушҡан әсе таш (әсеү таш) тураһында кем нимә белә, яҙып ебәреүегеҙҙе һорайбыҙ. Бәлки, ул таштың русса атамаһын белеүселәр барҙыр. Юғиһә, һуңғы бер-нисә ай ҡыҙыҡһынып, ҡайһы бер ғилемле ағай-апайҙарҙан һораштырып йөрөлә, яуап табылмай.**

**М.Г. Баяновтың һәм А.Ф. Маматовтың "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабын файҙаланып, Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТҮРӘ ҠУШТАНДЫ ҺӨЙМӘҪ,

## үҙе унһыҙ көн күрмәҫ

Ике бармаҡ араһына ит үрмәй, туған туғанһыҙ көн күрмәй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кешеләр сәғәт механизмы кеүек: көйләп ебәрһәң, ниңә икәнен дә белмәҫтән, алға китә бирә.

**(А. Шопенгауэр).**

Булдыра алғанса алға барығыҙ, аяғығыҙ ауырта икән, юл ситенә сығып, китеп барғандарҙы көнләшмәй генә күҙәтегеҙ - улар ҙа алыҫ китә алмаясаҡ бит.

**(И. Тургенев).**

Һуғыштар әсәләр тарафынан ҡарғышҡа дусар булған.

**(Гораций Флакк).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Борон, бик борон заманда диңгеҙ уртаһында Тойғолар һәм Шатлыҡ, Һағыш, Аң кеүек кешенең рухи ҡиммәттәре бергә йәшәгән утрау булған. Берҙән-бер көндө Тойғолар улар йәшәгән утрауҙы диңгеҙ ҡаплаясаҡ икәнен һиҙеп ҡалған. Барыһы ла караптарға ултырып, утрауҙы ҡалдырып киткән. Мөхәббәт кенә ашыҡмаған һәм һуңғы минутҡаса утрауҙа ҡалырға булған. Утрауҙы һыу баҫыуҙан ҡотҡарыу мөмкин түгел икәнен аңлағас ҡына ярҙамға саҡырып ҡысҡыра башлаған. Бына эргәнән генә Байлыҡтың карабы үтеп киткән. Уны карабына алыуҙы үтенгән Мөхәббәткә Байлыҡ: "Һиңә бында урын юҡ, карабым алтын-көмөш менән тулы",- тип кенә яуаплаған. Мөхәббәт эргәнән генә йөҙөп китеп барған Ғорурлыҡҡа ярҙам һорап өндәшкән. Ләкин Ғорурлыҡ:"Карабыма һине ултыртып, бындағы тәртип һәм камиллыҡты боҙғом килмәй..."- тип яуаплаған. Мөхәббәт Һағышҡа ярҙам һорап үтенгән. "О, Мөхәббәт, минең шул ҡәҙәре эсем боша, шуға ла яңғыҙ ҡалғым килә",- тип үтеп киткән уныһы ла. Бына утрау эргәһенә Шатлыҡтың карабы яҡынлаған. Уныһы Мөхәббәтте бөтөнләй ишетмәгән.**

**Бына бер саҡ Мөхәббәткә тауыш ишетелә: "Кил бында, Мөхәббәт, мин һине үҙем менән алып китәм!" Тауыш артынса утрауға сал сәсле ҡарт килеп туҡтай һәм мөхәббәтте үҙе менән алып китә. Мөхәббәт бәләнән ҡотолғанына шул тиклем шатлана, ул хатта ҡарттың исемен дә һорарға онота. Ергә барып еткәс, Мөхәббәт караптан төшөп ҡала, ә ҡарт ары йөҙөп китә. Ҡарт күҙҙән юғалғас ҡына Мөхәббәттең уға рәхмәт тә әйтмәгәне иҫенә төшә. Шул саҡ Мөхәббәт Аңға мөрәжәғәт итә: "Әйт әле, мине кем ҡотҡарҙы?" "Ваҡыт ғәли йәнәптәре булды был",- тип яуаплай Аң. "Ваҡыт?- тип аптырап һорай Мөхәббәт.- Ә ниңә ул миңә ярҙам итте?" "Сөнки бары тик Ваҡыт ҡына Мөхәббәттең был тормошта ниндәй мөһим роль уйнағанын аңлай һәм белә..." - ти Аң".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 3624